✔ **ИҒТИБАР! Уҡыусыларыбыҙҙы 6 ноябрҙә 19 сәғәттә баш ҡаланың "Нефтсе" мәҙәниәт һарайына саҡырабыҙ: унда "Киске Өфө" гәзите ойошторолоуҙың 10 йыллығына арналған ижад кисәһе үтәсәк. Сценарий авторы Зөһрә Бураҡаева менән режиссер Хөрмәт Үтәшев, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары тарафынан әҙерләнгән матур тамашала көтөп ҡалабыҙ.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 йыл

27 ОКТЯБРЬ - 2 НОЯБРЬ (ҠАРАСАЙ - ҠЫРПАҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№43 (513)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Үлән...**

үҫкән ерендә генә үҫә



3

**Үткәндәрҙе тергеҙеп,**

күҙаллатып була икән!



6-7

**"Ҡуңыр буға" юлынан барып...**



8-9 тарих эҙҙәрен таптыҡ

**"Һин үҙең көлмәйһең,**

ә һинән барыһы ла көлә", тине әсәйем...



11

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Дин тотмаған, дин тураһында белеме булмаған кешеләрҙең "Ниндәй ислам дөрөҫ?" тигән бәхәстәренә һәм мосолмандарға ғибәҙәт ҡылырға өйрәтеүенә нисек ҡарайһығыҙ?

***Морат ЛОҠМАНОВ, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында "Йома" тапшырыуын алып барыусы:*** Бер нәмә лә хикмәтһеҙ булмай. Дини белеме булмаған кешеләрҙең ислам тураһында бәхәс алып барыуының да бер хикмәте барҙыр. Шуға ла мин был күренештең ыңғай яҡтарын да күрәм. Был үҙе үк дин менән ҡыҙыҡһына, фекерләй башлауҙы күрһәтә. Теләйҙәрме, юҡмы, изге ниәттәнме, яуыз ниәт менәнме, был кешеләр дин таратыуға булышлыҡ итәләр. Ошондай сығыштарҙан һуң халыҡ уйлана, хәҡиҡәт эҙләй башлай. Исламды дөрөҫ итеп күҙ алдына ла килтермәгән кешеләрҙең ауыҙ тултырып дин тураһында һөйләүен туҡтатып та, тыйып та булмай. Халыҡ, күп осраҡта ялған, нигеҙһеҙ дәлилдәр менән томаларға тырышылған һүҙҙәр артында хаҡ динде күреп, уға эйәрер, тип ышанырға ҡала.

Мәсьәлә икенсе нәмәлә. Беҙҙә дини ғилем түбән. Ғалимдарыбыҙ юҡ. Тап ошо арҡала мосолмандарға, бар йәмғиәткә юл күрһәтә алыусылар юҡ. Аҡыллы фекерҙәр, зирәк ҡараштар етешмәй. Ошо йүнәлештә ныҡлап эшләргә кәрәк тә инде. Мәғлүмәт яҡтылыҡ тиҙлеге менән таралған заманда мосолмандар, тәү сиратта, ғалимдарыбыҙ, ошо мәғлүмәт йылғаһына юл ярып, уға дөрөҫ йүнәлеш биреүсе, ситкә тайпылыуҙан һаҡлап барыусы юлбашсылар булырға тейеш тә инде.

***Тимур РӘХМӘТУЛЛИН, журналист:*** Ниндәй ҙә булһа күренеш тураһында һөйләгәндә ситтән күҙәтеүсе генә булыу аҙ. Кәмендә ошо процеста үҙенә лә ҡатнашырға кәрәк. Был мосолман өммәтендә булған ваҡиғаларға баһа биреүселәргә лә ҡағыла. Шуға ла ислам тураһында бәхәс ҡороусылар һәм "дөрөҫ" итеп ғибәҙәт ҡылырға өйрәтеүселәрҙең дә иң кәмендә дин талаптарын теүәл үтәгән мосолман булыуы мотлаҡ. Ошо нескәлекте иҫәпкә алмайынса, ҡайҙа ла һүҙ ҡыҫтырып ҡалырға тырышыуы арҡаһында дәүләт һәм фән учреждениеларында урын билә гән ҡайһы бер ислам буйынса "эксперттар" дингә ҡаршы көрәште әүҙем пропагандалаусы булараҡ ҡабул ителә. Улар ғилми дәрәжәләрен һәм биләгән вазифаларын ҡулланып, ябай халыҡтың башын бутай. Был "белгестәрҙең" исламы ниндәйҙер мифик образдарға барып тоташа. Һөҙөмтәлә дин талаптарын үтәргә тырышҡан мосолмандар, бигерәк тә яулыҡ ябынған ҡыҙҙар, ниндәйҙер сит заттарға әйләнә, нормаларҙан тайпылыусылар булараҡ ҡабул ителә. Мөфтиәттәрҙең бындай уйҙырмаларҙы теләр-теләмәҫ кенә инҡар итеүе йә, шулай кәрәк, тигәндәй яуапһыҙ ҡалыуы ғәжәпләндерә. Ә мәғлүмәт ялғанына тәплә итеп яуап бирергә тырышыусыларға сиратташы мөһөр тағыла.

Киләсәктә мосолмандар ислам диненә бер ниндәй ҡағылышы булмаған һүҙҙәр һөйләгән һәм эштәр ҡылған стратегик "эксперттар" менән аҡыллы итеп бәхәстәр алып барыр дәрәжәгә етер, тип уйлайым. Сөнки хәҙер йөштәр күпләп дингә килә, улар дин йолаларын үтәүгә генә түгел, уның асылына төшөнөргә, был тәғлимәтте ныҡлап өйрәнергә ынтыла. Аллаһы Тәғәлә барыһын да үҙ урынына ҡуясаҡ, иншалла!

(Дауамы 2-се биттә).

НИКАХТАР КҮКТӘ ЯРАЛА

# ӨФӨ ҒАИЛӘЛӘРЕ СЫҒЫШЫ...

## ете төҫлө йәйғор балҡышын хәтерләтте

**Ныҡлы ғаилә ил нигеҙен тәшкил итә, тип халҡыбыҙ белмәй әйтмәгән. Ғаиләләр татыу, имен булһа, илебеҙҙең дә ҡеүәте, көсө арта ғына бара. Тап бына шуға күрә лә ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау һәм нығытыу бурысы дәүләт әһәмиәтендәге көнүҙәк мәсьәлә булыуҙан туҡтағаны юҡ.**

Республикабыҙҙа Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы тип нарыҡланған быйылғы йылда ошо йөһәттән һәр төрлө ойоштороу саралары айырыуса йәнләнде. Шуларҙың береһе - йәш ғаиләләр конкурстары. Үткән шәмбе "Нур" татар дәүләт театры бинаһында баш ҡалабыҙҙың ете районында булып үткән конкурстарҙа еңеүселәр Өфө ҡалаһының иң яҡшы ғаиләһе исеменә ярышты. Театр фойеһына аяҡ баҫыу менән бындағы гөрләп торған байрам тантанаһы өйөрмәһенә килеп эләгәһең: ете урында йәйғорҙоң ете төҫөн хәтерләтеп, береһенән - береһе гүзәлерәк, береһенән-береһе сағыуыраҡ ете ғаилә һәм "Ныҡлы ғаилә - ҡеүәтле ил" номинацияһына улар әҙерләгән күргәҙмә-мөйөштәр теҙелеп киткән. Унда ҡул эштәре, ашһыу өлгөләре ҡуйылған, ғаилә архивынан фотоһүрәттәр, шәжәрә ағастары эленгән. Һанаулы ғына минуттар эсендә жюри ағзаларын һәм тамашасыларҙы конкурсанттар үҙ ғаиләләре менән таныштырып китергә һәм шуның менән тәүге тәьҫорат тыуҙырырға тейеш.

(Дауамы 5-се биттә).



Булат Ғәйнетдинов фотоһы.
Гран-При яулаусы Әлиә менән Әлмир Мөхәмәтйәровтар улдары Айдимер һәм Әлимхан менән.

✓ *Имам Ғазали: "Аллаһ беҙҙе ярым табиптан һәм ярым дин ғалимынан һаҡлаһын", - тигән. Медицинаны белмәйенсә дауаларға маташыусының кешегә зыян килтереүе кеүек, динде аңламайынса, дин тураһында һөйләүсе зарар килтерә.*



БАШ ЙОРТТА...



# БЫЛ ТУҠТАЛҠА...

## матур урамдың йөҙөн боҙа

**Тормош ағымы шул тиклем шәп үтә, күҙ асып йомғансы әллә күпме ваҡиғалар, саралар, үҙгәрештәр булып ҡына тора. Баш ҡалабыҙ йөҙө лә әленән-әле үҙгәрештәр кисерә, матурлана. Шулай уҡ халыҡҡа төрлө уңайлыҡтар булдырыу буйынса ла бик күп эшләнә. Һәр хәлдә, баш ҡала етәкселәренең "Барыһы ла халыҡтың уңайлы йәшәүе өсөн!" тигән һүҙҙәренең эш менән нығытылыуы күҙ алдында.**

Мин үҙем Телеүҙәк янында йәшәйем. Баш ҡаланың тарихи үҙәге булған был яҡтар һәр ваҡыт кеше күплеге менән айырылып тора. Өфөлөләр ҙә, ҡалаға килгән ҡунаҡтар ҙа Телеүҙәк яғын ситләтеп үтмәй. Кешенең күплеге был районды тәртиптә һәм таҙалыҡта тотоуға күп иғтибар бүлеүҙе талап итә. Әйтергә кәрәк, был йәһәттән ҡала округы хакимиәтенә дәғүә белдереп булмай, сөнки урамдар һәм йорт ихаталары һәр ваҡыт таҙа һәм төҙөкләндерелгән. Ә Салауат Юлаев һәйкәле яғына ҡараһаң, күҙ ҡыуана. Бында булған үҙгәрештәргә тик һоҡланырға ғына ҡала. Ғөмүмән, Телеүҙәк йәшәү өсөн бик йәтеш һәм уңайлы район.

Шулай ҙа һәр ерҙәге кеүек, баш ҡалала етешһеҙлектәр ҙә, хәл итәһе мәсьәләләр ҙә юҡ түгел. Минең ҡарамаҡҡа, ошондай мәсьәләләрҙең береһе - "Телеүҙәк" автобустар туҡталҡаһы урынлашҡан урын. Автобус маршруттарының күплеге һәм "Телеүҙәк"тең һуңғы туҡталҡа булыуы Ғафури урамы башланған урынды автобустар паркына әйләндереп, был урамдың йәмен ебәрә лә ҡуя. Әлбиттә, туҡталҡа булыуы мөһим, ләкин уны ҡырғараҡ, ҡала ҡунаҡтары күҙенә әллә ни эленеп бармаған урынғараҡ күсереү мәсьәләһе ҡаралһа, бик яҡшы булыр ине. Мәҫәлән, Пушкин баҙары янында шулай уҡ "Телеүҙәк" тип аталған туҡталҡа бар һәм ҡайһы бер автобустар нәҡ шунан ҡуҙғала.

Бәлки, Ғафури урамындағы туҡталҡанан юл башлаусы автобустарҙы ла Пушкин баҙары яғына күсереү урынлы булыр? Был аҙым, беренсенән, Ғафури урамындағы тығындарҙы бер аҙ бөтөрөргә ярҙам итһә, икенсенән, Телеүҙәк эргәһен, Конгресс-холл яны майҙаны тирәһен, урамдың йөҙөн матурайтыр ине. Мин күптәрҙең теләген белдергәнмендер, тип уйлайым.

**Сәкинә СОЛТАНБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Дин тотмаған, дин тураһында белеме булмаған кешеләрҙең "Ниндәй ислам дөрөҫ?" тигән бәхәстәренә һәм мосолмандарға ғибәҙәт ҡылырға өйрәтеүенә нисек ҡарайһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Айнур БИРҒӘЛИН, Ә.Вәлиди исемендәге милли китапхана хеҙмәткәре, "Рамаҙан" мәсете имамы:*** Махсус белеме булмаған кешенең ислам дине тураһында гәп һатыуына логик аңлатыу таба алмайым. Был велосипед ҡына йүнәтә белгән оҫтаның автомобиль йүнәтеп маташыуы кеүек үк сәйер тойола. Бөгөнгө көндә ислам белгесе булып сығыш яһарға яратҡан дин "эксперттары" күбәйҙе. Мәҫәлән, шуларҙың береһе, Мәскәү университеттарының доценты, "һары" матбуғаттан алынған мәҡәләләрҙе ҡулланып, Рәсәйҙәге ислам тураһында китап яҙҙы. "Яңы белгес" диндең тарихына төшөнөп, динде генә түгел, Көнсығыш ғилемен дә ныҡлап өйрәнеп тороп мәшәҡәтләнмәне. Сәй табыны артындағы һөйләшеүҙәргә таянып, псевдохеҙмәт яҙҙы ла, ҙур "ғалим" булып китте. Китабының коммерция нигеҙендә таратылыуы арҡаһында билдәлелек яуланы, "һығымталарының" кемгәләр уңайлы булыуы арҡаһында баш экспертҡа әйләнде.

Имам Ғазали: "Аллаһ беҙҙе ярым табиптан һәм ярым дин ғалимынан һаҡлаһын", - тигән. Беренсе осраҡта тән яфаланһа, икенсе осраҡта йән яфалана. Медицинаны белмәйенсә дауаларға маташыусының кешегә зыян килтереүе кеүек, динде аңламайынса, дин тураһында һөйләүсе лә кешелеккә, рухи донъяға зарар килтерә.

Ислам дине ғилеме ярымбелгестәренең хәбәрҙәре халыҡтың аңын томалаһын өсөн, үҙебеҙҙең абруйлы дин әһелдәре, белгестәребеҙ булыуы мөһим. Был кешеләр, динде яҡшы белеүе менән бергә, йәмғиәттә барған ваҡиғаларға ваҡытында мониторинг үткәреп, объектив баһа бирә белергә тейеш. Ғөмүмән, кеше уҡымышлы булғанда ғына ота. Ул һәр һүҙгә эйәреп бармай. Мәғлүмәтте анализлай, тикшерә. Телевидение, баҫма биттәрендә сыҡҡанды иң хаҡ һәм һуңғы инстанция тип ҡабул итеү, киң мәғлүмәт сараларындағы бөтә хәбәргә һүҙһеҙ ышаныу күптәрҙең хатаһы ул. Сөнки сенсация артынан ҡыуған журналистика өсөн хәҡиҡәт түгел, "күпертелгән" факт кәрәк. Шуға ла, үҙ өҫтөңдә даими эшләп, бар яҡтан да камиллашҡанда ғына көтөүҙәге һарыҡ булмаясаҡһың.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Өфө ҡалаһы Дим районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

• 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә яҙылырға була.** Октябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыға - **"Айыҡ туй сценарийҙары"**, 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың **"Мин айыҡ тормош башланым"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

• Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**, беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**, беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәтенең отставкаһы тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы һәм республика Хөкүмәте Премьер-министры вазифаһын башҡарыуҙы үҙ өҫтөнә алды. Был аҙым республиканың августа башланған башҡарма власть органдары системаһын реформалаштырыуҙың киләһе этабы булып тора. Уның төп маҡсаты - вәкәләттәрҙе ҡабатлауҙан арыныу һәм Хөкүмәт менән Башҡортостан Президенты Хакимиәте структуралары араһында яуаплылыҡты аныҡ бүлеү.

✓ Төбәк башлығы Указында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте составында Премьер-министрҙың туғыҙ урынбаҫары, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары раҫланды. Документҡа ярашлы, Башҡортостан Республикаһы Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығы, Башҡортостан Республикаһы Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты бөтөрөлдө. Башҡортостан Республикаһы Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы үҙгәртеләсәк. Уға Башҡортостан Республикаһы Халыҡ мәшғүллеге дәүләт хеҙмәте идаралығы ҡушыла. Республикала дүрт агентлыҡ булдырыла.

✓ Республика башлығы Указы менән Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫарҙары тәғәйенләнде. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары итеп Ноғоманов Рәүф Сәмиғулла улы, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Аппараты етәксеһе итеп Тажетдинов Илшат Азамат улы, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫарҙары итеп Ғүмәрова Лилиә Салауат ҡыҙы, Исаев Эрнст Фәрит улы, Маврин Евгений Викторович, Мәһәҙиев Марат Шәриф улы, Сәғитов Салауат Тәлғәт улы, Шаронов Дмитрий Владимирович тәғәйенләнде.

✓ Башҡортостан Республикаһы Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты туризм өлкәһендә Башҡортостан Республикаһы Туризм агентлығы итеп үҙгәртелде. Бөтөрөлгән Дәүләт комитетының эшҡыуарлыҡ өлкәһендәге функциялары Башҡортостан Республикаһы Иҡтисади үҫеш министрлығына тапшырылды. БР Хөкүмәте составында шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы Территориаль үҫеш агентлығы булдырылды.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

**Башҡортостанда донъяла осрамаған ниндәй һирәк үләндәр, ағастар үҫкәнлеген, хайуандар, ҡоштар һәм бөжәктәр йәшәгәнлеген белгегеҙ килһә, Башҡортостандың "Ҡыҙыл китаб"ына ғына күҙ һалыуығыҙ ҙа етә. Уларҙың күбеһе тик беҙҙә генә булғанға һәм беҙҙә генә тороп ҡалғанға күрә лә ошо китапта урын алған. Әйтәйек, 2011 йылда дүртенсегә ҡайтанан баҫылған (тәүгеләре 1980, 1987, 2004 йылдарҙа донъя күрә) был китапҡа закон тарафынан һаҡланыуға алынырға тейешле хайуандарҙың - 112, үҫемлектәрҙең, ылымыҡтарҙың, мүктәрҙең һәм бәшмәктәрҙең 292 төрө индерелгән.**

# ҮЛӘН...

## үҫкән ерендә генә үҫә



Бар төрҙәр ҙә китаптан китапҡа, асылда, күсә килә, тик ҡайһылары, әйтәйек, кәмей, юҡҡа сыға барған төрҙәр исемлегенә индерелә, ә инде бөтөнләй юҡҡа сыҡҡандары төшөп ҡала бара. Күренекле шағир Асылғужа Баһумановтың хәбәрһеҙ юғалғандар хаҡындағы шиғырында әйтелгәнсә, "Тереләр араһында юҡ, үлгәнен күрмәгәндәр..." тигән һымаҡ була инде. Әммә ошондай китаптың булыуы ҡайһы бер юғалған төрҙәрҙең дә барлығын билдәләргә булышлыҡ итә.

Мәҫәлән, һуңғы дүрт быуат эсендә Башҡортостанда 10 төр хайуандың һәм ҡоштарҙың бөтөнләй юҡҡа сығыуы теркәлгән. Бик үкенесле, әлбиттә. Уларға тарпандар, төньяҡ боландары, сайғаҡтар, ҡонолар, кештәр, ҡара ҡоҙғондар, аҡ сәсле ҡоҙғондар, туғаҙаҡтар, бөҙрә сәсле баба ҡоштары, аҡбалыҡтар инә. 2001 йылға тиклем Башҡортостандың "Ҡыҙыл китаб"ы тәүҙә СССР, унан Рәсәй Федерацияһы "Ҡыҙыл китаб"ының бер өлөшө генә булып иҫәпләнеп, тәҡдим итеү кәсөнә генә эйә булған. Ә инде Башҡортостан Республикаһының 2001 йылдың 11 октябрендә ҡабул ителгән 231-се "Башҡортостан Республикаһы "Ҡыҙыл китаб"ы" ҡарары нигеҙендә был китапҡа ингән берәмектәр дәүләт һаҡлауы аҫтына алына. Ҡарарҙың ҡушымтаһында ниндәй төрҙәрҙең һаҡлыҡ аҫтына алыныуы, әгәр ҙә кешеләрҙең уларға йоғонған осраҡта ниндәй штраф санкциялары билдәләнеүенә тиклем бар. Документ бик етди, һәр бер нескәлегенә тиклем иҫкәрмәгә алынып әҙерләнгән.

Бер мәл күптәнге танышым минә көтмәгәндә шундайын бер парадоксаль фекер әйтеп һалмаһынмы: "Халҡыбыҙ нисә быуаттар буйына Уралым, Уралтауым, тип, ошо ергә йәбешеп тик ята. Ошо ерҙе һаҡлайым, тип, күпме ҡан ҡойған, ҡырылып юҡҡа сыға яҙған. Мандырлыҡ ерме ни был: йәйе өс ай ғына, ҡышы алты ай, етмәһә, килеп тороп үҙәккә үтерлек һыуыҡ. Йәйен утын-бесән әҙерләп, йүнләп ял итергә лә өлгөрмәй, йәйҙе күрмәй ҙә ҡалаһын. Картуфтан башҡа йүнле йәшелсә-емеш тә үҫтереп булмай беҙҙең ерҙә. Биш йылдың өсөһө ҡоро килә. Ана, башҡалар, утын-бесән әҙерләйем, тип ыҙаламай, йылы диңгеҙ ярҙарында йыл әйләнәһенә йәшелсә-емеш ашап, диңгеҙҙә һыу инеп, рәхәтләнеп ял итеп йәшәй..."

Танышым миңә был һүҙҙәрҙе шаяртып әйткән һымаҡ тойолһа ла, үҙенсә бик етди күренде, әйткән саҡта дәлилдәренең хаҡлығына үҙе лә ышана ине, булһа кәрәк. Һүҙҙәренең хаҡлығы өсөн ант итергә, ҡаршы төшһәм, үҙенең хаҡлығы өсөн бәхәсләшергә, хатта талашырға әҙер һымаҡ ине үҙе.

Мин уны бары тик ике дәлилем менән генә шундуҡ был уйҙарынан кирегә дүндерә алдым. Тәүге дәлилем Башҡорт балына ҡайтып ҡала ине. Танышым үҙебеҙҙә "картуфтан башҡа йүнле йәшелсә-емеш тә үҫтереп булмай" тиһә лә, донъя буйлап һәр төрлө рекордтарҙы ҡуйған, нисәмә конкурстарҙа нисәмә Алтын миҙалдар яулаған Башҡорт балының донъялағы башҡа төрлө балдарҙан айырмалы үҙенсәлеге Уралтауҙа күп төрлө үләндәрҙең, сәскәләрҙең һәм һерҡәләрҙең булыуы менән аңлатыла бит инде. Етмәһә, мең төрлө үләндәрҙән, сәскәләрҙән балды беҙгә бал ҡорттары йыйып бирә һәм беҙгә, шул уҡ йылы яҡта йәшәүселәр һымаҡ, йәшелсә-емеш үҫтереп әллә ни ыҙаларға ла түгел. Сөнки емешеләктәге файҙалы компоненттарҙан артығырағы Башҡорт балы составында бар. Ҡыҫҡаһы, Хоҙай беҙҙе ошо юл менән йылы яҡта йәшәмәүҙең бер мәхрүмлегенән ҡотҡарған. Икенсенән, хәҙер беҙҙекеләр йәшелсәләрҙең һәм емештәрҙең һәр төрлөһөн үҫтереүгә өлгәште. Беҙҙә хәҙер ҡарбузы ла, ҡауыны ла, виноградлы ла һ.б. үҫә. Иждиһат һәм тырышлыҡ һалыу ғына кәрәк. Картуфтан башҡа нәмәне үҫтереп булмай, тип фәҡәт ялҡау ғына кеше әйтәләр хәҙер.

Икенсе дәлилем: ни өсөн үҙҙәрендә мәңге ҡоролоҡ торһа ла, әйтәйек, ҡаҙаҡтар менән монголдар далаһына, ғәрәптәр менән африканлылар сүллегенә йәбешеп тик ята? Ниңә улар ҙа башҡалар һымаҡ йыл әйләнәһенә йәшелсә-емеш ашап, диңгеҙ буйҙарында ғына йәшәмәй һуң? Беҙ бөгөн ҡаҙаҡты далаһыҙ, ғәрәпте сүллекһеҙ күҙ алдына килтерә алмаған һымаҡ, башҡортто Уралтауһыҙ күҙ алдына килтерә алмайбыҙ. Шуға күрә лә, әгәр ҙә башҡорт быуаттар һуҙымында, Уралтауҙы һаҡлайым, тип, сит баҫҡынсыларға ҡаршы көрәшкән икән, ошо ерҙе һаҡлауҙы үҙ асылын һаҡлауға тиң күргән. "Урман айыуҙы һаҡлай, айыу урманды һаҡлай" тигән әйтем хаҡында һүҙ алып барғанда беҙ был турала фекер йөрөткәйнек.

Гәзиттең быйылғы 5-се һанында иҡтисад фәндәре кандидаты, доцент Илдар Ғәбитов "Итәк ҡырҡып ең ямайбыҙмы? Ә итәк бөтһә, ни эшләрбеҙ һуң?" тигән әңгәмәлә ни өсөн Рәсәй иҡтисадының донъя кимәлендә конкурентлыҡҡа һәләтле булмауын шундай фактор менән нигеҙләгәйне: "Беҙҙең ил иҡтисад яғынан конкурентлыҡҡа һәләтле түгел, һәләтле булманы һәм булмаясаҡ та. Сөнки донъяла Монголиянан ҡала иң һыуыҡ ил - ул Рәсәй. Беҙҙең илдә ҡыш көнө кешегә йылы шарттар тыуҙырыр өсөн генә лә ил байлығының 40-50 процент самаһы китә. Йылы йорттар төҙөр өсөн күпме кирбес, газ, ташкүмер, электр энергияһы, кейемһалым, аҙыҡ-түлек һәм башҡа сеймал кәрәк! Мәҫәлән, Испания, Италия илдәре, Америка һәм донъяның башҡа алға киткән илдәрендә үҙәкләштерелгән йылытыу селтәрҙәре юҡ. Беҙҙең һыуыҡ ҡышты йылытыр өсөн ил байлығының байтағы китә..."

Илдар Ғәбитовтың килтергән дәлиленән һуң шундай һорау тыуа: улай булғас, иҡтисадсы телгә алып үткән үҙәкләштерелгән йылытыу селтәрҙәре булмаған илдәрҙә йәшәүселәрҙәгә космополитизм, йәғни милли традицияларҙы инҡар иткән идеология нисек барлыҡҡа килә һуң? Хәҙерге көндә был идеологиянан берәү ҙә азат түгел, шулай ҙа һәр яҡтан комфортлы йәшәү шарттары барлыҡҡа килтерә алғандар был идеологияға нығыраҡ бирелә. Ни өсөн?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы киләһе һанда).**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# КҮҢЕЛЕМ ГӘЗИТЕ

**"Киске Өфө"нө мин икенсе йыл ғына алдырам. Шуны аңланым: ул сыға башлағанға ун йыл үтеп тә киткән, ҡалған һигеҙ йыл эсендә мин күпте юғалтҡанмын икән.**

Бик шәп гәзит, афарин, рәхмәт уны сығарыусыларға! Гәзиттең йөкмәткеһе минең күңел талаптарыма бермә-бер тап килә. Ул проблемаларҙы дөрөҫ итеп ҡуя белә, етешһеҙлектәрҙе күрһәтә, маҡсаттар билдәләй, халыҡтың күҙен аса. Унын бәсен төшөрмәйек. Был бер редакция хеҙмәткәрҙәренә генә бәйле түгел, әгәр ҙә уға күпләп яҙылһаҡ, үҙебеҙҙе борсоған проблемалар тураһында яҙышып торһаҡ, гәзит йәшәйәсәк.

Проблемалар, тигәндән, форсаттан файҙаланып, уларҙың "Киске Өфө"лә күтәрелгән бер нисәһен ҡабатлап та үткем килә. Мин был проблемаларҙың ошо гәзит битендә артабан да ҡыйыуыраҡ күтәрелеүен теләйем. Барыбыҙҙы ла иң нык борсоған проблема ул - ауылдарҙағы эшһеҙлек. Халҡыбыҙҙың иң ҙур өлөшө ауылда йәшәгәс, был проблема иң тәүҙә беҙгә ҡағыла."Башҡортостан - дуҫлыҡ иле, тыныслыҡ иле!" тип күкрәк һуғабыҙ. Бәлки, хаҡлыбыҙҙыр ҙа, әммә ул "дуҫлыҡ"тан иң күп зыян күргәне төп халыҡ вәкилдәре. Ни өсөн тигәндә, беҙҙекеләр эш эҙләп ситкә олаҡҡан бер ваҡытта илебеҙгә сит яҡтарҙан әкәм-төкәмдәр килеп тула, үҙ эшен аса, байлыҡ туплай. Урындағы телерадио каналдары аша бер туктауһыҙ шау-шоу, кәнсирт-мәнсирт бирәләр, уйындар уйнаталар. Мин уларҙы кәрәкмәй тип әйтмәйем, әммә сама булырға тейештер бит. Был урында мин радио һәм телевидение аша "Эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәре" тигән баш аҫтында башҡорттарҙы эшҡыуарлыҡҡа өйрәтеүсе тапшырыуҙар үткәрә башларға тәҡдим итер инем. Беҙгә ҙур бизнесҡа тотонорҙан алда эште бәләкәй эшҡыуарлыҡтан башлау фарыз. Мәктәптә уҡыуҙы ла башланғыс синыфтарҙан башлайҙар бит. Тап шунын кеүек. Ауыл ерендә, мәҫәлән, был эште күпләп кәзә, һарыҡ үрсетеүҙән башларға була.

Ҡыҫҡаһы, тормоштоң ошондай өлкәләренә нығыраҡ үтеп ин, күңелем баҫмаһы - "Киске Өфө"!

**Илһам ЯХИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһының бөтөрөлгән Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығының киң коммуникациялар, нәшриәт-полиграфия эшмәкәрлеге, баҫма продукция таратыу һәм телекоммуникация селтәрҙәрен үҫтереү өлкәһендәге функцияларын Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһы Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығына йөкмәтте. Шул уҡ министрлыҡтың элемтә һәм мәғлүмәтләштереү өлкәһе Башҡортостан Республикаһының яңы булдырылған Мәғлүмәт технологиялары агентлығына тапшырылды.

✓IV Бөтә Рәсәй социология конгресы ултырышы сиктәрендә Рәсәй дәүләт социаль университетының Өфөләге филиалының яңы корпусын асыу тантанаһы үтте. Яңы уҡытыу бүлмәләре Өфө үҙәгендәге ремонтланған бинала урынлашты. Был шатлыҡлы ваҡиға менән юғары уҡыу йорто уҡытыусылары һәм студенттары Рәсәй дәүләт социаль университеты проректоры, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, Рәсәй Космонавтика федерацияһы президенты Владимир Коваленок ҡотланы.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың бойороғо менән Башҡортостан Республикаһы муниципаль берәмектәренең IV съезын үткәреү көнө билдәләнде. Сара 2012 йылдың 14 декабрендә Өфөлә үтә. Съезда меңгә яҡын кешенең ҡатнашыуы көтөлә. Уларҙың 750-нән ашыуы - муниципаль берәмектәр делегаттары. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "БР Муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһы 2006 йылдың майында булдырылды. Уның составына республиканың барлыҡ 895 муниципаль берәмеге инә.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Федераль закон проекты тикшерелде. Ултырышта Дәүләт Думаһының Мәғариф буйынса комитеты рәйесе Александр Дегтярев ҡатнашты. Александр Дегтярев иҫәпләүенсә, бөгөнгө көндә Дәүләт Думаһы ҡарауына закон проектына 500-гә яҡын төҙәтмә тәҡдим ителде. Төҙәтмәләр һаны меңгә етәсәк, тип көтөлә. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, октябрь башында республиканың Дәүләт Йыйылышы ҡарамағында эш төркөмө булдырылғайны. Эш төркөмө етәксеһе Лилиә Ғүмәрова һүҙҙәренсә, закон проекты өҫтөндә эшләү процесында 60-ҡа яҡын төҙәтмә тәҡдим ителде. Уларҙың 20-нән ашыуы юридик яҡтан тикшереү үтте һәм Дәүләт Думаһына тәҡдим итеүгә әҙер.

**"Башинформ"дан.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТӨНЬЯҠ МЕНӘН КӨНЬЯҠТЫ...

## трамвайҙар тоташтырасаҡ

**Баш ҡаланың үҙәк магистралдәренең береһе булған Октябрь проспектынан әле генә "тығын"дарҙы бөтөрөү маҡсатынан трамвай линияһын алып, автомобилдәр өсөн өҫтәмә һыҙат булдырғайнылар. Әммә был ғына теләгән һөҙөмтә бирмәне, киреһенсә, төп магистралдә "тығын"дар тағы ла күбәйҙе һымаҡ. Быны раҫлағандай, һуңғы ваҡытта чиновниктарҙың докладтарында "метробус", "тиҙ йөрөшлө трамвай", "кала яны электричкаһы" тигән терминдар нығыраҡ яңғырай башланы. Власть әһелдәренең фекеренсә, тап улар баш ҡаланың үҙәк урамдарын бер аҙ бушатыу мөмкинлеген бирәсәк.**

Ҡала хакимиәтенең транспорт бүлеге етәксеһе Әнүәр Миңлебаев әйтеүенсә, трамвай линияһын Октябрь проспектына параллель урамдарҙан - Комсомол урамынан Рәсәй урамына тиклем, Минһажев урамынан Салауат Юлаев проспектына тиклем һәм Ҡала мәҙәниәт һарайынан Космонавтар урамына тиклем һалыу ҡарала.

Әгәр яңы маршруттар асыла ҡалһа, унда яңы трамвайҙар йөрөйәсәк. Йәғни улар кондиционерҙар, йылытыу системаһы, хатта үткәргесһеҙ Интернет менән йыһазландырыласаҡ.

Мәсьәләнең шул яғы ла бар: белгестәр әйтеүенсә, был идеяны тормошҡа ашырыу өсөн өфөләләрҙең рөхсәте кәрәк, шуға күрә һәр районда фекер алышыуҙар ойоштороласаҡ. Улар хакимиәттәрҙә йәки мәктәптәрҙә үтәсәк. Йыйылыштар тураһындағы мәғлүмәт район гәзиттәрендә, ҡала округы Советының сайтында донъя күрәсәк. Был йыйылыштарҙа тыуған ҡалаһының яҙмышына һәм киләсәгенә, үҙенең киләсәгенә битараф булмаған һәр кем ҡатнаша ала. Шулай уҡ хакимиәттең рәсми сайтында "Һорау алыуҙар" рубрикаһындағы тауыш биреүҙә ҡатнашып та үҙ фекереңде белдерергә мөмкин.

Был проектты өфөләләр хуплаған осраҡта, уны тормошҡа ашырыу этаптарға бүлеп алып барыласаҡ. Беренсе этапта рельстарҙы тауышһыҙ технология буйынса һалыу ҡуҙалланһа, икенсе этап булып тиҙ йөрөшлө трамвайҙар һатып алыу ҡарала. Сығымдарға килгәндә инде, ҡала округы хакимиәтенең финанс идаралығы етәксеһе Илгиз Насретдинов белдереүенсә, уның беренсе этабына ғына яҡынса 1,5 миллиард һум тотоноу ҡуҙаллана, тотош проект яҡынса 4-5 миллиард һумға барып баҫасаҡ.

Әйткәндәй, иҫегеҙҙә булһа, һүтеп алыр алдынан Октябрь проспектында рельстар тап тауышһыҙ технология ҡулланып һалынғайны...

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

**"Тереләрҙең ҡәҙерен бел, үлгәндәрҙең ҡәберен бел", тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Был ҡанатлы һүҙҙәрҙе республика райондарының ҡайһы бер зыяраттары ҡапҡаларында ла күрергә мөмкин. Бер яҡтан ҡарағанда, ташландыҡ, бағаналары сереп, кәртәләре емерелеп, уртаһында мал-тыуар йөрөгән гүрстандарҙы күреп йөрәк әрнеүе менән сағыштырғанда, атай-олатайҙарҙың мәңгелек төйәге һаҡлаулы, ҡараулы булыуы яҡшыраҡ та. Икенсе күҙлектән сығып фекер йөрөткәндә, мосолмандар бер ваҡытта ла ҡәберҙе кәртә менән уратып, уның өҫтөнә ҡиммәтле гранит һәйкәлдәр, мәрмәр-плитәләр ҡуймаған. Бөгөн иһә хатта ауылдарҙа, мәрхүмдәрҙе ер ҡуйынына алып барып һалғас та, кемуҙарҙан ярышып, уның мәңгелек йортон матурлай башлайбыҙ...**

# ЗЫЯРАТТАРҒА...

## тарихи-мемориаль статусымы?

Өфө ҡала округы Советының 10-сы юбилей ултырышында, башҡа бихисап һорауҙар менән бер рәттән, депутаттарҙың баш ҡала территорияһында Ерләү урындарын тәрбиәләү һәм ерләү хеҙмәте күрһәтеүҙе ойоштороу тураһындағы положениеға үҙгәрештәр индереү мәсьәләһен ҡарауы, ирекһеҙҙән, шундай ҡапма-ҡаршы фекер тыуҙырҙы. Мәсьәләгә яҡыныраҡ килгәндә, һүҙ Өфө территорияһында урынлашҡан ике бороңғо - Сергиевск һәм Мосолман зыяратына тарихи-мемориаль зыярат статусын биреү тәҡдиме тураһында бара. Депутаттарға шундай дәлил килтерелде: был зыяраттарҙа республикаға ғына түгел, бөтөн илгә билдәле өфөләләр ерләнгән һәм был объекттар закон тарафынан һаҡланырға тейеш. Ә уйлап ҡараһаң, тормошта ҡанун менән көйләнеү талап ителмәгән, ул ҡанун һәр кешенең булмышында йәшәгән ғәҙәти ғәмәлдәр ҙә бар. Улар: ата-әсәне хөрмәт итеү, уларға ҡәҙер күрһәтеү, уларҙы һуңғы юлға оҙатып, мәңгелек йорттарын тәртиптә тотоу, мәрхүмдәр рухына аяттар уҡытып, доғалар ҡылыу, уларҙы йән тыныслығы менән тәьмин итеү... Иҫләһәгеҙ, Ғайса бәйғәмбәрҙең шундай һүҙҙәре бар: "Тереләр хаҡында хәстәрлек күрергә кәрәк, мәрхүмдәргә тынослоҡ кәрәк".

Икенсе яҡтан ҡарағанда, әгәр зыяраттарға тарихи-мемориаль статусын бирә башлаһаҡ, тиҙҙән бөтә Ер шары тотош ҡәберлеккә әйләнмәсме? Һүҙ мосолман зыяраты тураһында ла барғас, тағы ла мосолмандарҙа ерләү ҡағиҙәһенә күҙ һалырға кәрәктер. Элек мосолмандарҙы ерләгәс, ҡәберҙе таштар менән генә уратып алып, баш осона ла ташҡа ырып йәки буяу менән генә яҙып, ошо урында кемдең ятыуын белдереп ҡуйғандар. Ваҡыт үткәс, ҡәберлек ер менән тигеҙләнгән һәм унда ҡабат яңы ҡәбер ҡаҙыу рөхсәт ителгән. Шулай итеп, бороңғолар ерҙе тотош зыяратҡа әйләндереү мәсьәләһен дә, уны кире энергетика менән бысратмауҙы ла бер юлы хәл иткән.

Әйткәндәй, был - бәхәсле мәсьәлә, һәм беҙ уға нөктә ҡуймайбыҙ, ә уҡыусыларыбыҙ, дин әһелдәре был хаҡта үҙ фекерен белдерер, тигән өмөттә ҡалабыҙ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# МОСОЛМАН БАЙРАМДАРЫ...

## йылдан-йыл күберәк халыҡты ылыҡтыра

**Мосолмандар ислам динендә иң оло байрамдарҙың береһе булған Ид әл Әдхә, йәки Ҡорбан байрамын билдәләне. Донъяның төрлө мөйөштәрендә ғәйет намаҙҙары уҡылды, ҡорбан салынды, биш миллион тирәһе дин ҡәрҙәшебеҙ диндең фарызы булған хаж ғәмәлен үтәне. Республика мосолмандары ла байрамдан ситтә ҡалманы.**

Бөгөн мосолмандар һаны ишәйеү менән изге ғәмәлдә башҡарыусылар һаны ла арта. Ауыл ерендә йәшәгән кешеләргә ҡорбан салыу әллә ни ҙур ауырлыҡтар килтермәһә, ҡалала көн күреүсе дин ҡәрҙәштәребеҙгә был ғәмәлде үтәү бер аҙ ҡыйыныраҡҡа тура килә. Шуға ла хәҙер ҡалаларҙағы мәсеттәр уларҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә ярҙам итә лә инде. Махсус әҙерләнгән урында, мал һуйыу оҫталары, дин талаптарына яуап биргәндәй итеп, ҡорбанды салып, эшкәртеп бирәләр. Ындай майҙансыҡтар был юлы ла баш ҡала мәсеттәре янында, шулай уҡ "Ғофран"да ла йыһазландырылды.

Ҡорбан итен таратыуҙы ла мәсеттәр үҙҙәре ойоштора. "Ғофран"мәсетендә әйтеүҙәренсә, етемдәр, ололар һәм ғәриптәр йорттарынан мөрәжәғәттәр алынған. Шулай уҡ ярҙам һорап килгән бер кем дә яуапһыҙ ҡалдырылмаған. Аллаһы Тәғәлә насип итһә, хәллерәк мосолмандарҙың салдырған ҡорбандары һәммәһенә лә етәсәк, тиҙәр мәсеттә. Байрам кәйефе булһын һәм ошо көндә ас кешеләр ҡалмаһын өсөн "Ғофран" мәсете янында ике мең кешегә етерлек былау әҙерләнгәйне. Былауға тиклем йыйылған халыҡ "Ғофран" мәсете имамы Нух хәҙрәт Хәсәновты тыңланы.

- Аллаһы Тәғәлә салған ҡорбандарыбыҙҙы ҡабул итһен, - тине Нух хәҙрәт. - Иманыбыҙ нығынһын, гонаһтарыбыҙ ғәфү ителһен. Ғаиләләребеҙҙә, илебеҙҙә именлек, тыныслыҡ булһын. Араларыбыҙға шайтан төшмәһен, фетнә ҡупмаһын. Эштәребеҙ ҡотло, алған белемебеҙ файҙалы булһын. Мосолмандар, мәсеттәр, мәҙрәсәләр һаны артһын, Йәштәребеҙ иһә әҙәпле, итәғәтле балалар үҫтерәсәк ныҡлы ғаиләләр ҡорһон, йорт һалып, имен-аман, татыу донъя көтһөн. Өммәтебеҙгә, йәмғиәткә файҙа килтереп, нур сәсеп, яҡшылыҡҡа өндәп, яманлыҡтан тыйылып йәшәйек.

Шулай итеп, баш ҡалала урынлашҡан мәсеттәр Ураҙа, Ҡорбан кеүек байрамдарҙа ғына түгел, һәр йомала туп-тулы була. Ҡайһы бер саҡ мәсет эсендә урын етмәүе арҡаһында, ихатала, урамда ла намаҙ уҡыла. Яҡын киләсәктә ғибәҙәт ҡылыу урындары байрам намаҙҙарына килеүселәрҙе генә түгел, йомаға йөрөүселәрҙе лә һыйҙырмаясаҡ, тип ҡуҙалларға була.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң Конгресс-холында IV "Социология һәм йәмғиәт: глобаль талаптар һәм төбәктәр үҫеше" Бөтә Рәсәй социология конгресының икенсе этабы эшләне. Унда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев ҡатнашты. Конгреста Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалалары һәм Рәсәй Федерацияһы субъекттарының алдынғы ғилми үҙәктәренән 500-ҙән ашыу ғалим ҡатнаша. Социологтар осрашыуҙа сит илдәрҙән, шул иҫәптән БДБ илдәре, Һиндостан, Бразилия, Вьетнам, Көньяҡ Африка Республикаһынан 20 вәкил килде.

✓2011 йыл һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостандың иң уңышлы муниципалитеттары рейтингы төҙөлдө. Комплексы социаль-иҡтисади үҫеш йәһәтенән иң яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән өсөн лидер биләмәләр БР бюджетынан гранттар аласаҡ. Был маҡсаттарға бүленгән средстволарҙың дөйөм күләме 200 миллион һум тәшкил итә. Муниципаль районлар араһында Баҡалы, Ҡариҙел, Ейәнсура, Миәкә, Әбйәлил, Саҡмағош райондары еңеүселәр тип табылды. Административ үҙәктәре ҡала булған муниципаль райондар һәм ҡала округтары араһында Бөләбәй районы һәм Октябрьский, Нефтекама ҡалалары еңеп сыҡты. Шулай уҡ 2011 йыл һөҙөмтәләре буйынса өҫтәмә гранттар менән Тәтешле районы һәм Күмертау ҡалаһы билдәләнде.

✓Өфөнөң Дим районына ингән урында тимер юлдары аша һалынған автомобиль күпере 22 октябрҙә файҙаланыуға тапшырылды. Автотранспорт хәрәкәтен Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов асты. Дим районының көнсығыш өлөшөндә юл үткәргес 2011 йылдың июлендә реконструкциялана башлай. Проект тимер юлдар аша күпер төҙөүҙе, ике километр оҙонлоҡта төп автомобиль юлын, шулай уҡ урындарҙа бәләкәй юлдар төҙөүҙе күҙ уңында тота. 2013 йылдың йәйендә объектты тулыһынса файҙаланыуға тапшырыу ҡаралған. Шулай уҡ киләһе йылға "Өфө-Дим" автомобиль юлын киңәйтеү планлаштырыла.

✓Рәсәй Хөкүмәте октябрь аҙағына тиклем тәмәкегә ҡаршы закон проектын тикшерергә планлаштыра, уға ярашлы 2015 йылдың 1 ғинуарынан башлап йәмәғәт урындарында тәмәке тартыу бөтөнләй тыйыласаҡ. Документ киоскыларҙа тәмәке һатыуҙы, шулай уҡ тәмәке изделиеларын рекламалауҙы тыйыуҙы күҙ уңында тота. Башҡортостан парламентарийҙары был закон проектын тулыһынса хуплай.

*НИКАХТАР КҮКТӘ ЯРАЛА*

# ӨФӨ ҒАИЛӘЛӘРЕ СЫҒЫШЫ...

## ете төҫлө йәйғор балҡышын хәтерләтте

**(Башы 1-се биттә).**

Кемгә нисек булғандыр, ә беҙгә Орджоникидзе районынан Йосоповтар ғаиләһенең үҙенсәлекле асыҡ дәресе бик оҡшаны. Жюри ағзаларын парта артына ултыртып, үҙе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләүсе Әлфиә Йосопова "Ғаилә тарихы" темаһына йөкмәткеле дәрес үткәрҙе. Октябрь районынан Ольга менән Юрий Беляевтарҙың татыу, берҙәм, ҙур ғаиләһе (улдары Глеб, Данил һәм ҡурсаҡ шикелле иң бәләкәстәре - Ульяна) сәнғәткә ғашиҡтар: күргәҙмәләренә улар үҙ ҡулдары менән эшләгән мебель өлгөләрен, үҙҙәре яҙған матур картиналарҙы ҡуйған.

Бына, ниһайәт, байрам күренештәре тамаша залының төп сәхнәһенә күсә. Хәҙер ғаиләләр үҙ һәләттәрен башҡа төрлө номинацияларҙа раҫларға тейеш."Минең Рәсәй! Минең ғаилә!"тип аталған визит карточкаһын иң беренсе булып асып ебәреү бәхете Киров районы буйынса еңеүсе булған Лилиә менән Салауат Искужиндарға насип булды. Лилиә Мостай Кәрим исемендәге 158-се гимназияла башҡорт телеһәм әҙәбиәтенән уҡыта, ә Салауат - һәләтле бейеүсе, артист. Әлеге ошо ғаилә байрамын тотош уның һәм улар өсөн яныпкөйөргә йыйылған туғандары, дуҫтарының матур бейеүҙәре күтәрҙе, тиһәк тә хата булмаҫтыр. Дим районынан Олеся менән Михаил Васильевтарҙың һәм уларҙың балалары Давид менән Есениәның үҙҙәре хаҡында үҙҙәре төшөргән видеофильм менән таныштырыуы ла мауыҡтырғыс булды. Ярыштың өсөнсө этабындағы балалар конкурсы байрамды бермә-бер йәнләндереп ебәрһә, аҙаҡҡы, йомғаҡлау өлөшө лә мауыҡтырғыс тамашалар вәғәҙә итә ине, сөнки ул ғаилә традициялары һәм яратҡан байрамдар темаһына бағышланды. 9 Май - Еңеү көнө, Яңы йыл, ғаилә ағзаларының тыуған көндәрен йыйынаҡ ҡына сәхнәләштереп күрһәтеү тамашасылар күңеленә хуш килде, тап уларҙың иң көтөп алынған изге байрамдар икәнлегенә тағы бер тапҡыр инандырҙы. Тағы ла ниҙер онотолған һымаҡ, моңһоуланыбыраҡ ҡалған тамашасылар сәхнәгә Ленин районынан Әлиә менән Әлмир Мөхәмәтйәровтар ғаиләһе килеп сыҡҡас, гөрләтеп ҡул саба башланы. Һабантуй! Әлбиттә, башҡортто уның тарихи тамырҙарына үрелеп үҫкән һабантуйһыҙ күҙ алдына килтереп булыр инеме һуң? Юҡ, әлбиттә. Ул да беҙҙең хеҙмәтте, йырҙы, оһоллоҡто, таҫыллыҡты, мәргәнлекте, халыҡтар дуҫлығын көйләгәндереүсе изге байрамдарыбыҙҙың береһе икәнлекте күрһәтте Мөхәмәтйәровтарҙың сығышы.

Кисә барған бер-ике сәғәт эсендә сәхнәлә сығыш яһаусы был ете ғаиләнең һәр береһе туғандарса яҡын, үҙ булып өлгөргәйне инде тамашасы өсөн: матурҙар, берҙәмдәр, талантлылар, көслөләр... Шулар араһынан кем еңеүсе тип иғлан ителер? Жюри ағзаларының хәлен самаларға була ине. "Ғаиләләр конкурсы - иң яҡты һәм иң яҡшы байрамдарыбыҙҙың береһе,- тине Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары, жюри рәйесе Сынтимер Баязитов йомғаҡлау һүҙе менән сығыш яһағанда.- Конкурс беҙгә иң яҡшы, иң татыу, иң талантлы, иң эшһөйәр ғаиләләрҙе асыҡларға ярҙам итә. Конкурс беҙгә йәштәр араһында ғаилә институты ҡиммәттәрен күтәрергә, ир менән ҡатын мөнәсәбәттәре мәҙәниәтен, сәләмәт йәшәү рәүешен тәрбиәләргә, ғаиләләрҙең социаль әүҙемлеген үҫтерергә ярҙам итә." Сынтимер Биктимер улы әйтеүенсә, шуныһы шатлыҡлы: конкурста ҡатнашыусыларҙың бөтәһе лә матур, талантлы, уларҙың кемеһендер айырып әйтеүе лә ауыр хатта. Ә шулай ҙа абруйлы жюри үҙ баһаһын сығарырға тейеш. Шулай итеп, "Иң позитив ғаилә" номинацияһында Ирина менән Ринат Ғизәтуллиндар (Совет районы) еңеүсе булһа, Динара менән Илдар Насибуллиндар (Калинин районы) - "Иң шат күңелле ғаилә", ә Әлфиә менән Рәшит Йосоповтар (Орджоникидзе районы) "Иң шиғриәтле ғаилә" булып танылдылар. Киров районынан Лилиә менән Салауат Исҡужиндар Ш дәрәжә дипломға лайыҡ булһа, 2-се урынды Ольга менән Юрий Беляевтар( Октябрь районы), 1-се урынды Олеся менән Михаил Васильевтар (Дим районы) яуланы. Ә инде Гран-при Әлиә менән Әлмир Мөхәмәтйәровтар (Ленин районы) бәхетенә насип булды.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**



Булат ҒӘЙНЕТДИНОВ фотоһы.

*ИҠТИСАД ХӘЛДӘРЕ*

# КРЕДИТ БИРЕРҘӘН АЛДА...

## кире алырҙы уйлау кәрәк

**Бөгөнгө көндә кредит алмаған кеше бик һирәк. Ҡайһы берәүҙәр хатта икешәр-өсәр кредит түләп йәшәргә мәжбүр. Бурыслы булып көн күреү, бәхтиһән, тотош илдәргә хас күренеш икән. Ҡайһы бер илдәр, тап кешеләр кеүек, бер кредитын ҡаплау өсөн икенсеһен, унан өсөнсөһөн һәм тағы әллә күпме кредит алып, иҡтисади хәлен яҡшыртырға тырыша.**

Күптән түгел бер-нисә ил, финанс ярҙам һорап, Рәсәйгә мөрәжәғәт иткән. Был хаҡта Рәсәй финанс министры Антон Силуанов белдерҙе. Әгәр ҙа башҡа илдәр Рәсәйгә кредитор булараҡ ҡарай икән, тимәк, беҙҙең илдең иҡтисади хәле әҙмекүпме тоторокло, тип әйтергә мөмкин. Шулай ҙа был хәлгә икенсе күҙлектән сығып ҡарау ҙа мөһим. Күп белгестәр иҡтисади көрсөктөң икенсе тулҡыны ябырылыу ҡурҡынысы хаҡында ышаныслы һүҙ йөрөткәндә, кеҫәндәге аҡсаны сығарып һалыу үтә лә хәүефле икәнлеген танымай булмай.

Европа илдәре элегерәк Рәсәйҙән финанс ярҙам һорамай ине тиерлек. Тик бер-нисә йыл элек кенә Исландия, Греция һәм Кипр кредит биреүҙе һорап мөрәжәғәт итте һәм Рәсәй улар араһынан тик Кипрға ғына 2011 йыл аҙағында 2,5 миллиард евро күләмендә аҡса бүлде. Бөгөн кредит һораусылар араһында тағы ла Кипр бар һәм был юлы ул Рәсәйҙән 5 миллиард евро аҡса алырға теләй. Иҡтисади ярҙам һораусы ҡалған дүрт илде министр әйтеүҙән баш тарта һәм бары тик уларҙың "быға тиклем мөрәжәғәт иткән ҙур булмаған ил булыуҙары" һәм әлеге ваҡытта уларҙың тәҡдимдәре ҡаралыуы" хаҡында белдерә.

Башҡа илдәр хаҡында аныҡ ҡына әйтеп булмаһа ла, ҡайһы бер эксперттар был юлы ла Рәсәйҙең Кипрға аҡса бүлеү ихтималлығын күҙаллай. Ләкин Кипр иҡтисадын тик Рәсәй аҡсаһы ғына ҡотҡара алмаясаҡ һәм ул быны яҡшы аңлай. Шуға күрә ул аҡса һорап Евросоюзға ла мөрәжәғәт иткән. Әгәр ҙа Евросоюз уның үтенесен кире ҡаҡһа, ә Рәсәй кредит бирергә ҡарар итһә, беҙҙең илгә ул аҡсаларҙың кире ҡайтыуы оло хәүеф аҫтында буласаҡ, сөнки билдәле Standard&Poor*s һәм Moody*s рейтинг агентлыҡтары Кипрҙы түләргә һәләтһеҙ илдәр рәтенә индерҙе. Шулай булғас, былтыр йылына 4,5 процент менән биш йылға тиклем алған кредиты менән иҫәпләшеп бөтмәгән илгә тағы ла бер кредит биреү мөмкинлеге хаҡында һүҙ ҙә булырға тейеш түгел һымаҡ. Ләкин хәлдәрҙең ысынында нисек булыуын берәү ҙә аныҡ ҡына әйтә алмай һәм беҙгә Мәскәүҙең ҡарарын көтөргә генә ҡала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәйҙең донъя илдәренә аҡса биреп тә, аҙаҡ ул бурысты иҫәптән сығарыу тәжрибәһе бар. Шулай булғас, әлеге ваҡытта бирелгән кредиттар менән дә ошо уҡ хәл ҡабатланмаясаҡ, тип берәү ҙә иҫбатлай алмай. Ә шул уҡ ваҡытта фатирлы, машиналы булам, баламды уҡытам, һаулығымды нығытам тип мохтажлыҡтан сығып алған Рәсәй халҡының ҙур процентлы кредиттарының бер тине лә дәүләт тарафынан "ғәфү ителгәне" юҡ. Ә Кипрға гуманлы Рәсәй тарафынан бирелгән 4,5 процентлы кредит хаҡында ябай халыҡҡа хатта хыялланыу ҙа көлкө тойола.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Аҙ ҡанлылыҡтан

Кесерткән менән ҡайын япрағын тигеҙ өлөштә алып, бергә ҡушып болғатырға. 2 ҡалаҡ ҡатнашмаға 1,5 стакан һыу ҡайнатып ҡойорға, 1 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә, 0,5 стакан сөгөлдөр һуты ҡушырға. Тәүлегенә 3-4 мәртәбә ашарҙан 20 минут алда эсергә. Дауаланыу курсы 8 аҙна.

### Яман шештән

Яңы ғына һығылған һуған һутын һыу менән ҡатнаштырырға (1:2), ашарҙан 20 минут алда көнөнә 3-4 мәртәбә 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

### Тромбофлебиттан

Был сирҙән имән ҡайырыһы ярҙам итә. Бынын өсөн 1 ҡалаҡ имән ҡайырыһына 1 стакан ҡайнаған һыу ҡойорға һәм 25 минут һүрән генә утта торорға. Тағы ла 40 минут төнәткәс, һөҙөргә. Тәүлегенә 3 мәртәбә ашар алдынан 1 ҡалаҡ эсергә.

### Склероздан

1 ҡалаҡ ҡарабойҙай сәскәһен 2 стакан ҡайнар һыуға һалып, ябыҡ һауытта 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

### Сәс ҡойолғанда

❖ 1 ҡалаҡ үгәй инә үләне япрағына 1 стакан ҡайнаған һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә. Сәсте йыуырҙан 40-60 минут алда баш тиреһенә һөртөргә.

❖ меңъяпраҡтың әле генә һығып алынған һутын 2 аҙна дауамында тәүлегенә 1-2 мәртәбә баш тиреһенә һөртөү ҙә ыңғай һөҙөмтә бирә.

❖ арыш икмәгенең йомшағын ваҡлап, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойорға. Икмәк ебегәс, шуны сәс төптәренә ышҡып һөртөргә һәм ярты сәғәттән сәсте йыуырға. Быны даими эшләһәң, сәс нығый, матурлана, ҡойолмай.

### Гипертониянан дауа

Ҡан баҫымы күтәрелеп, баш әйләнгәндә 120 грамм көнбағыш япрағын йыуып, турарға һәм һыуға һалып, 10-15 минут бешерергә. Төнәтмә әҙер булғас, һөҙөргә, тигеҙләп, 3 өлөшкә бүлергә. Шуны көнөнә 3 тапҡыр сәй урынына эсергә.

### Йөрәк ауыртмаһын тиһәң...

Өҫтәлегеҙҙән гел генә инжир емеше өҙөлмәһен.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА

# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Етенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Дәрестә Ҡөрьән китабын күрһәтеп, сүрәләрҙең, аяттарҙың ни икәнлеген аңлатып, һәр сүрәнең башындағы тәүге һөйләмдең бер үк яҙылышына иғтибар иттерергә кәрәк. Һәр сүрә "Бисмиллаһир-рахманир-рәхим", йәғни "Бөйөк рәхмәт вә шәфҡәт эйәһе Аллаһтың исем-шәрифе менән башлайым" тип башлана. "Ҡөрьәндә Алла тапшырған, Алла әйткән" тип һөйләү дөрөҫ түгел. Беҙ Алланың ниндәй ҡиәфәттә, ҡайҙа икәнлеген белмәйбеҙ. Шуның өсөн һәр ваҡыт "Алла тарафынан әйтелгән", "Алла тарафынан тапшырылған" тип һөйләргә кәрәк. Ә Сөннә - ул Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тормош юлы, ҡылған ғәмәлдәре, уның тураһында сығарылған риүәйәттәр, Бәйғәмбәрҙең фекерҙәре тупланған китап. Шуға ла Ҡөрьәндән һуң икенсе изге китап тип атала. Сөннәлә тупланған һүҙҙәрҙе хәҙис тиҙәр. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев өс йөҙ ҙә өс хәҙисте шиғри юлдарға һалып нәшер итте. Улар бик тиҙ ятлап алына. Мәҫәлән:

Баҫып торған саҡта асыуың килһә,
Ултырып тор асыуың баҫылғансы.
Ултырып та асыуың баҫылмаһа,
Ятып торсо - сығып бөтһөн асыу.

## Етенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Донъя диндәренең изге китаптарынан дәреслектә бирелгән өҙөктәрен яҙып алһалар, бөтөн диндәрҙең дә фәҡәт яҡшыға ғына өйрәтеүенә тағы бер тапҡыр инаныр уҡыусылар. Исламдың төп китабы - Ҡөрьән. "Уҡыу" тигәнде аңлата. Йәһүд дине һәм Христиандарҙың төп китаптары - "Иҫке Зәһет"- "Библия". "Китаптар" тигәнде аңлата. Христиандар Ғайса бәйғәмбәр тураһында яҙылған китапты "Яңы Зәһет" - "Евангелие" тип атай. "Изге хәбәр" тигәнде аңлата. Буддизмда төп китап - "Типитака". "Аҡыл тупланған өс кәрзин" тигәнде аңлата.

## Етенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Изге - иң ҡәҙерле тигәнде аңлата. Тимәк, кешегә изгелек эшләү - ул яҡшынан да яҡшыһы. Шуға ла: "Кояш янында - йылылыҡ, әсә янында - изгелек" тигән мәҡәл бар халыҡта. Тимәк, изгелек эшләү - ул иң ихлас тойғонан килеп сыҡҡан ғәмәл. Изгелек ерҙә ҡалмаҫ, тиҙәр. Тимәк, изгелек бер ваҡытта ла онотолмай. Әлбиттә, изгелек шунда уҡ кире ҡайтмай. Әммә кешенең ҡыуанысын, һиңә рәхмәтле булыуын күреү һинең үҙеңә рәхәт, күңелеңә тыныслыҡ, ҡәнәғәтлек килтерә. Күңел тыныслығы - бик оло бәхет ул. Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр, ти халыҡ. Ана шул күңел тыныслығы, күңел шатлығы ҡотҡара ла инде бәләләрҙән. Ә яманлыҡ бер ваҡытта ла күңел тыныслығы, ҡәнәғәтлек тойғоһо килтермәй. Яманлыҡ эшләгән кеше һәр ваҡыт нимәнәндер ҡаса, боҫа, яманлығының беленеп ҡуйыуынан хәүефләнә. Ундай кеше юҡ-барҙан да тертләй, ҡурҡа. Күңел тыныслығы юғала. Шуға күрә, иртәме-һуңмы, бәләгә осрай. Һәр ваҡыт, һәр ерҙә кешегә изгелек итергә, ярҙам ҡулы һуҙырға тырышыу үҙ намыҫың таҙалығы өсөн мөһим. "Бына мин ҡалай изгелекле кешемен!" тип маҡтаныу, кеше алдында маһайыу өсөн түгел. Изгелек эшлә лә һыуға һал, ти халыҡ. Ғөмүмән, һәйбәт күңелле кеше: "Түкта әле, мин изгелек эшләп алайым", - тип уйламай, кеше мохтажлығын күрә лә ярҙам ҡулы һуҙа. Шундай риүәйәт бар. Берәүҙең дуҫы аҡса һорап тора. Ә ул аҡса бирә лә уйға ҡала. Уның бошоноп ултырыуын күреп, ҡатыны: "Ни эшләп ҡайғыраһың, аҡсаң юҡ?" - тип һорай. "Дуҫымдың мохтаж икәнлеген күрә инем бит. Ни эшләп үҙем белеп ярҙам ҡулы һуҙманым икән, тип өҙгәләнәм",- ти ире. Тимәк, иң яҡшыһы, иң маҡтаулыһы - үҙ белдегең менән ярҙам ҡулы һуҙыу. Изгелекле кешенең күңеле яҡты була. Күңел яҡтылығы йөҙөнә күсә - йөҙө балҡыу, ҡарашы нурлы була. Ундай кешене, һөйкөмлө, тиҙәр. Һөйкөмлөлөк - ул иң ҡиммәтле матурлыҡ. Әллә ҡайҙан һиҙелеп тора. Мәҫәлән, урамдан берәйһенән адрес йәки сәғәт һорарға уйлаһаҡ, йөҙө яҡты кешене эҙләп табабыҙ һәм яңылышмайбыҙ. "Урал батыр" эпосында әйтелгәнсә:

*Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,*
*Кеше булһын затығыҙ;*
*Яманға юл ҡуймағыҙ,*
*Яҡшынан баш тартмағыҙ!*

Хөрмәтле уҡытыусылар! Эпостан өҙөк килтергән саҡта, һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Был осраҡта: ат - исем, зат - булмыш, кеше булыу - һәр тарафтан өлгөлө булыу.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ТАРИХЫНДАН ДАН ТАП!

**...Таҡта тротуар буйлап яйлап ҡына йә парлашып, йә берәмләп кешеләр ағымы үтә. Уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ хәстәре. Кемдер ял итергә сыҡҡан, кемдер сауҙа эше киң йәйелдерелгән майҙанға ашыға. Бәғзеләр иһә тәҙрәһен асып ҡуйып, урамда ҡырмыҫҡа кеүек мыжғышҡан халыҡ ағымын күҙәтә. Ҡайҙандыр тимерсенең тимер сүкегәне ишетелә. Был тауышҡа ара-тирә шундай уҡ, әммә сибегерәк тауыш ҡушыла. Мөғайын, был ювелирҙыр һәм үҙенең бәләкәй генә һандалында ювелир әйберҙәр сүкейҙер. Ҡапыл иҫкән ел ҡайһы яҡтандыр тәмле ит еҫен килтерә. Уға көлдә бешкән көлсә еҫе ҡушылып, танауҙы ҡытыҡлай... Кемгә нисектер, әммә "Өфө-II" ҡаласығында барған ҡаҙыныу эштәре барышында күҙ алдына шундай картина килә. Тарих күҙ алдында ҡабат терелә.**

# ҮТКӘНДӘРҘЕ ТЕРГЕҘЕП,



## күҙаллатып була икән!

Боронғо Өфө темаһына матур йәй көнөндә түгел, ә шыҡһыҙ, ямғырлы көҙҙә мөрәжәғәт итеүебеҙҙең сере лә бар. Тап бынан 6 йыл элек, 2006 йылдың көҙөндә, боронғо ҡаласыҡ территорияһында археологик ҡаҙыныу эштәре тергеҙелде. Был академик Нияз Мәжитовтың һәм үҙ тарихына битараф булмаған башҡорт йәмәғәтселегенең сираттағы еңеүе ине. Сөнки тап ошо майҙанда төҙөлөш эштәре киң йәйелдерелеп, Башҡортостанда, Рәсәйҙә генә түгел, донъя масштабында ҙур әһәмиәткә эйә боронғо ҡаласыҡ юҡ ителә башлағайны ла инде. 2006 йылдың көҙөндә республика етәкселеге был ҡырағайлыҡҡа сик ҡуйып, унда ҡаҙыныу эштәрен алып барырға рөхсәт бирҙе. Тарих факультеты студенттары һыуыҡ, ҡарлы ямғыр яуыуына ла ҡарамай, оло энтузиазм менән эш башланы. Бер ниндәй шарттар юҡ. Элек ошонда йәшәгән бер әбей, балаларҙы йәлләп, саҡ ҡына булһа ла йылынырҙар, тип, бер яғы һүтеп алынған йорттоң бөтөн ҡалған бүлмәһенең аҫҡысын бирә. Студент егеттәрҙең береһе "Йәшлек" гәзите форумында ҡаҙыныу эштәренең барышы, ниндәй шарттарҙа эшләүҙәре менән таныштырып тора. Форумсылар тиҙ генә бер ҡарарға килеп, студенттарҙы көнөнә бер тапҡыр булһа ла йылы аш менән тәьмин итеүҙе ойоштора. Төрлө өлкәләрҙә эшләгән, кемеһе ятаҡта, кемеһе фатирҙы ҡуртымға алып йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, форумсылар билдәле бер сумма йыя, ҡыҙҙар көн һайын төшкө аш әҙерләй, ә инде машиналары булған ир-азаматтар уларҙы төш ваҡытында, үҙҙәренең төшкө ял ваҡытын ҡорбан итеп, студенттарға ташый. Был изге лә, сауаплы ла эштән хатта Мәскәү башҡорттары ла ситтә ҡалманы. Алты йылдан һуң ниндәй үҙгәрештәр бар икән?

- Мәғлүм булыуынса, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарары менән "Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей ҡурсаулығы дәүләт бюджет учреждениеһы ойошторолоуы "Өфө-II" ҡаласығына ҡарашты, ҡайһы бер ҡаршылыҡтар булһа ла, ыңғай яҡҡа үҙгәртте, - ти йәш ойошманың йәш археологы Марсель Шәмсетдинов. - Ҡаҙыныу эштәре һәр йыл алып барыла, быйыл иһә ул июлдә башланғайны, һаманғаса дауам итә. Унда БДУ-ның тарих факультеты студенттары менән бер рәттән баш ҡаланың икенсе уҡыу йорттарынан да студенттар шөғөлләнә. Тейешле шарттар булдырылды, студенттарға йылы аш ойошторорола. Ҡаҙыныу эштәре алып барылған квадраттар ямғыр һәм ҡарҙан тенттар менән ҡапланған.

Тарихи-мәҙәни музей ҡурсаулығының саралар планына ярашлы, бында тикшеренеү эштәре 2020 йылға тиклем алып барыласаҡ. Әлеге ваҡытта студенттар ике: 150 һәм 80 квадрат метрлыҡ майҙандарҙа эш алып бара. Был майҙандарҙы шулай шартлы рәүештә генә бүлдек, сөнки уларҙың тәүгеһе маҡсатлы федераль программаға ярашлы, икенсеһе республика программаһы буйынса финанслана. Әммә бер үк эш эшләнелә һәм ул музей-ҡурсаулыҡ директорының фән буйынса урынбаҫары Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитовтың етди күҙәтеүе аҫтында бара.

"Боронғо Өфө" ҙур майҙанды биләп, һаҡлауға алынһа ла, тирә-яҡта барған төҙөлөш эштәре юҡ юҡ та ҡамасаулап ҡуя. Ә бит был тарихи һәйкәлдең тирә-яҡта тиңе юҡ, шуға күрә һәр табыш беҙҙең өсөн әһәмиәтле мәғлүмәт йөрөтә. Ләкин һаҡһыҙлыҡ ошо мәғлүмәтте юҡ итеүе лә мөмкин. Бында төҙөлөш кенә түгел, тәбиғәт күренештәре лә, ҡар-ямғыр ҙа ҙур зыян килтерә. Мәҫәлән, ҡаҙылма урындарында мәҙәни ҡатламдың 4 метрға еткән урындары ла бар. Улар, әлбиттә, вертикаль рәүештә урынлашҡан, һәм ямғыр, ҡар был ҡатламды йыуып төшөрә. Шулай уҡ ағастан һалынған тротуарҙар кислород менән бәйләнешкә инеп, үҙендә һаҡлаған мәғлүмәтте юғалтыуы ла бар. Шуға күрә беҙ ниндәйҙер бер өлөштә был тротуар ҡатламдарынан анализ өсөн ниндәйҙер киҫәк алғаҫ, ул урындарҙы елем менән буяп, өҫтөнә полиэтилен ҡаплап, ҡабаттан күмеп ҡуйырға тырышабыҙ. Шул саҡта улар үҙенсәлеген һаҡлап ҡаласаҡ. Металл изделиелар табылһа, уларҙы һеркәгә, кока-колаға һалып, тутын алабыҙ. Бер егетебеҙ барлыҡ табыл-



ған табыштар ярҙамында боронғо ҡаласыҡтың реконструкцияһын әҙерләй. Киләсәктә музей-ҡаласыҡтың ниндәй булырын әлегә аныҡ ҡына әйтеү ҙә мөмкин түгел. Әммә уның бер өлөшө - мәҙәни ҡатлам, таҡта түшәлгән тротуарҙар, хужалыҡ соҡорҙары, талдан үреп, балсыҡ менән нығытылған диуар киҫәге - мотлаҡ тәбиғи хәлендә ҡалыр һәм быяла аҫтында булыр, моғайын. Тап шундай күренеш ҡаласыҡтың нисек булыуын һәр кемдең хыялында үҙенсә тергеҙәсәк.

Әлбиттә, "Өфө-II" ҡаласығы тирәләй төрлө фараздар йөрөй. Беҙ, археологтар, уларҙың һәр ҡайһыһын ихтирам итәбеҙ, улар беҙҙе артабанғы эҙләнеүҙәргә дәртләндерә. Эшмәкәрлегебеҙ менән үҙебеҙҙең фаразыбыҙҙы, фекерҙәребеҙҙе ныҡлы, дәлилле раҫларға тырышабыҙ. 2020 йылға тиклем, минеңсә, был өлкәлә бер генә һорау ҙа ҡалмаҫ, моғайын. Шуға күрә, бөгөн, кем хаҡлы, тип үҙ-ара бәхәс алып барырға түгел, ә бер команда булып эшләргә кәрәк. Мәҫәлән, ағас конструкциялар үҙлеген юғалтмаһын өсөн, бәлки, химиктар тиҙ арала ниндәйҙер матдә уйлап табыр, тарихсылар архивтарҙа мөһим, бығаса бер кем күрмәгән мәғлүмәткә юлығыр. Бындай күләмле хеҙмәт бары тик музей-ҡурсаулыҡ персоналының һәм археологтарҙың ғына эше түгел, тимәксемен. "Өфө-II" ҡаласығы Башҡортостан халҡының уртаҡ мәҙәни һәйкәле һәм унда тарихсылар, археологтар, химиктар һ.б. бергә эшләргә тейеш.

Әлеге ваҡытта ошо йылдар эсендә табылған ҡаҙылма табыштар БДУ-ның археология лабораторияһында "йәшәй". "Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей ҡурсаулығының административ бинаһында ремонт тамамланғас, был табыштарҙы үҙебеҙҙең музей фондына күсерәсәкбеҙ. Унда улар тейешле температурала һәм дымлылыҡта һаҡланасаҡ.

**Әйткәндәй, "Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы директоры Гәүһәр БАТТАЛОВА ла был мәсьәлә буйынса ҡайһы бер аңлатмаларын биреп үтте:**

- Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарары менән былтыр 15 мартта "Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей ҡурсаулығы дәүләт бюджет учреждениеһы ойошторолдо, ойоштороу саралары планы раҫланды. Саралар планына ярашлы, 2013 йылда "Ялан Евразияһы цивилизациялары диалогында Урта быуат ҡалаһы Башҡорт" тип аталған халыҡ-ара ғилми конференция һәм "Хәҙерге ҡала мөхитендә тарихи-мәҙәни мираҫ объекттарын консервациялау, реставрациялау һәм музейлаштырыу ысулдары" тигән ғилми-ғәмәли семинар үткәреү ниәтләнә.

Ҡаҙыныу һөҙөмтәләре республикала ғына түгел, федераль кимәлдә лә ҙур фәнни әһәмиәткә эйә. Йыл һайын республика ҡаҙнаһынан 2 миллион һум аҡса бүлеү ҡаралған. Быйыл беренсе тапҡыр, маҡсатлы федераль программаға ярашлы, "Өфө-II" ҡаласығы территорияһында тикшеренеүҙәр алып барыу өсөн 700 мең һум аҡса бүленгән. Бында шуны билдәләп китергә кәрәк - Рәсәй төбәктәрендә ҡаҙыныу эштәре алып барыу өсөн РФ бюджетынан ни бары 10 млн. һум бүлеү ҡаралған. БР Фәндәр академияһы Мәҙәниәт министрлығы менән берлектә "Боронғо Өфө" музей комплексының фәнни концепцияһы эшләнде, Һарытау ҡалаһына ҡаласыҡтың һаҡланыу зонаһы проекты экспертиза үтте. Бынан тыш, ергә документтар эшләү, музей-ҡурсаулыҡтың сиктәрен билдәләү, уның бинаһын төҙөү һәм ғилми тикшеренеүҙәр үткәреү планлаштырылған. Археологик байлыҡтарҙы һаҡлау, уларҙы лаборатория шарттарында тикшереү өсөн биналар кәрәк. Әлеге ваҡытта музей-ҡурсаулыҡ 200 квадрат метр бинала урынлашҡан. Ерҙе хосусилаштырыу мәсьәләһенә килгәндә инде, "Боронғо Өфө" урынлашасаҡ территорияның әлеге мәлдә милексеһе бар, ләкин дәүләт ихтыяжы өсөн улар Хөкүмәт ҡарары нигеҙендә тартып йәки һатып алына ала. БР Торлаҡ төҙөлөшө фонды кварталдарҙы үҙләштереү өсөн бер нисә йөҙ миллион һум аҡса сарыф иткән. Бөгөн торлаҡ йорттарҙағы милекселәрҙе күсереү өсөн 170 млн. һум аҡса кәрәк. Музей комплексының архитектура проектына конкурс иғлан итеү менән бер рәттән ошо мәсьәләләрҙе хәл итеү ҙә көн үҙәгендә һ.б. Шулай ҙа беҙ яҡын киләсәктә республиканың баш ҡалаһына ингән ерҙә үк архитектура буйынса тиңе булмаған, өфөлөләрҙең генә түгел, баш ҡала ҡунаҡтарының, туристарҙың яратҡан урынына әйләнәсәк үҙенсәлекле музей комплексы ҡаршы аласағына өмөтләнәбеҙ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ЙӘН ӘРНЕҮЕ*

# ЮҠҠА СЫҠМАЙЫҠ,

## йәки беҙ АБВГДЕЙК-нанмы?

**Был мәҡәләне яҙырға ултырғас, бала саҡтағы бер анекдот иҫкә килеп төштө: Ҡуян, Бүре, Айыу билет алмайынса, "ҡуян булып" ҡына трамвайҙа китеп баралар, ти. Бына кондуктор быларға бәйләнә, билет таптыра икән. Айыу: "Мин ОБХСС-тан",- тип ҡотолған. Бүре иһә: "Мин - КГБ-нан"- тигән. Бахыр Ҡуян, былар төрлө хәрефтәрҙән һүҙ төҙөп әйтә икән, тип уйлап: "Мин АБВГДЕЙК-нан", - тип ысҡындырған да штраф түләгән.**

Һуңғы арала мәғариф өлкәһендәге яңы стандарттар, оптималләштереүгә бәйле бәхәстәр ҡуйырғандан-ҡуйыра, һорауҙар арта. Исемен дә уйлап сығаралар бит әле: оптималләштереү, Федераль дәүләт белем биреү стандарты. Бының да, кем әйтмешләй, бер әтнәкеһе бар: аңлайышһыҙ һүҙҙең айышын, уның артында нимә йәшерелгәнен халыҡ аңлағанса, теге һүҙ һүҙҙән эшкә күсә лә инде, күп осраҡта үҙенең емергес көсөн йәйелдереп тә ебәрә. Теге заманда ла бит, суверенлыҡ (уныһы ла башҡорт һүҙе түгел) яуланыҡ та тынысландыҡ, йәнәһе, бөтәһе лә хәл ителде. Юҡ шул, тормош тигәнендең һәр осраҡта тәүге хәрефе төшөп ҡалыусан да, кәрәгеңә биреүсән. Яуланғанға ҡыуанып, ҡупайып та өлгөрмәнек, икенсе яҡтан БДИ, ФГОС (Федераль дәүләт белем биреү стандарты), оптималләштереү тигән хәрефтәр йыйылмаһымы, "аҡылдар" йыйылмаһымы, беҙгә яңы яу асты. Беҙ, үҙебеҙҙең холҡобоҙға тоғро ҡалып, һәр нәмәне, яңылыҡты "йәрхәмбикаллаһ" тип ҡабул иттек һәм итәбеҙ. Беҙҙең Бөрйән һынлы Бөрйәндә, балалар БДИ-ны яҡшы бирһен, уларға туған телде онотоу янамай, тип, беренсе синыфта 3 дәрес "Әлифба", 5 дәрес "Рус теле" алынған! Был хәл сәстәр үрә торорлоҡ түгелме ни?

Эйе, беҙ һаман ғәфләт йоҡоһонда, теге хәрефтәр ауындабыҙ. Ошо тәңгәлдә Ҡөрьәндең бер аятын килтереп китеү дөрөҫ булыр: "Әй, кешеләр, һеҙ Аллаһҡа мохтаж. Аллаһ, (бөтөн ғаләмдәр байлығына) хужа булараҡ, бер нәмәгә лә мохтаж түгел, Ул маҡтауға лайыҡ. Аллаһ ихтыяр итһә, һеҙҙе юҡҡа сығарыр һәм һеҙҙең урынға башҡа бер халыҡты бар итер. Был эштәрҙе башҡарыу Аллаһҡа бер ҙә ҡыйын түгел"("Фәтыр" (Яралтыусы) сүрәһе, 15-17-се аяттар).

Аят башына ҡайтайыҡ:"Әй, кешеләр, һеҙ Аллаһҡа мохтаж". Унан үҙебеҙҙең хәлгә ҡайтайыҡ: беҙ, башҡорттар, бөтә нәмәбеҙ булған халыҡ (бай тарихыбыҙ ҙа, ер-һыу байлығыбыҙ ҙа, аҫабалығыбыҙ ҙа - барсаһы ла. Хатта суверенлығыбыҙ ҙа. Совет осоронда көсләп беҙҙе диндән яҙҙырҙылар - Аллаһҡа мохтажлығыбыҙҙы яһалмалыҡ менән алдылар. Дин бөткәс, Бабичса әйткәндә, иман да, тел дә китте. Хатта тоғролоғобоҙ, берҙәмлегебеҙ, беребеҙ өсөн беребеҙҙең үлә яҙып тороуы, ҡотобоҙ бөттө. Беҙҙең бөтә нәмәбеҙ булды, күңелебеҙҙә Аллабыҙ ғына булманы. Ошоға яуап итеп, Аллаһ беҙҙән йөҙ сөйөрҙө, ярҙамынан ташланы. Динһеҙ халыҡ әҙәп-әхләген, инанысын, файҙалы ғилемен, берҙәмлеген юғалтты. Бөгөнгөбөҙ - ошонон сағылышы. Милләт, халыҡ булып һаҡланып ҡалыуҙың берҙән-бер һәм дөрөҫ юлы - хаҡ дингә килеү. Аллаһ беҙгә мохтаж түгел, беҙ Уға мохтаж. Аллаһ һүҙен инҡар итмәйек, был - һәр беребеҙ өсөн фарыз ғәмәл.

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# 1812 ЙЫЛҒЫ ВАТАН ҺУҒЫШЫНЫҢ...

## орден кавалерҙары

**Әбделнасир Ҡорманаев** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе Ҡара-табын олоҫонон Истамғол ауылынан (хәҙерге Учалы районы). 14-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. 4-се дәрәжә Изге Анна ордены (1813), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Әбделнасир Науруҙов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Йөҙ башы. Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе Теләү олоҫонон Науруҙ ауылынан (хәҙерге Учалы районы). 14-се Башҡорт полкы составында хеҙмәт итә. 1813 йылда Дрезден эргәһендәге алыштағы батырлығы өсөн 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1813) менән бүләкләнә. "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Абдулла Сурағолов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Поход старшинаһы (1813). 14-се башҡорт полкының полк командиры. Ырымбур губернаһының Верхнеуральск өйәҙенән. Полк составында 1813 йылда Лейпциг алышында, Дрезден эргәһендәге алышта һ. б. ҡатнаша. "Лейпциг эргәһендәге алыштағы батырлығы өсөн 1813 йылдың 31 октябрендә кавалерия генералы граф Л. Л. Беннигсендың 85-се бойороғона ярашлы" поход старшинаһы чины бирелә. 3-сө дәрәжә ике Изге Анна ордены, "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Ғәлекәй Ташбулатов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Есаул. Ырымбур губернаһының Верхнеуральск өйәҙенән. 14-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Бигерәк тә 1813 йылда Дрезден өсөн алыштарҙа үҙен күрһәтә. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1813) менән бүләкләнә. "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Килдейәр Байбулдин (К. Баудулдин)** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Йөҙ башы (1813). Ырымбур губернаһының Верхнеуральск өйәҙенән. 14-се Башҡорт полкы составында 1813 йылда Лейпциг алышында, Дрезден эргәһендәге алышта ҡатнаша. "1813 йылдың 26 сентябрендәге Гисгибень ауылы эргәһендәге, 27-дә Дон эргәһендәге, 29-дағы һәм 1 октябрҙәге Блацен ауылы эргәһендәге" эшмәкәрлеге өсөн кавалерия генералы барон Л. Л. Беннигсен тарафынан йөҙ башы чины бирелә. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1813), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Назарбай Тләпов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Есаул. Ырымбур губернаһының Верхнеуральск өйәҙенән. 14-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Голландия, Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. "1813 йылдың 26 сентябрендә Гисгибень ауылы эргәһендәге, 27-һендә Дон эргәһендәге, 29-ы Плауден ауылы, Дрезден эргәһендәге, Лейпциг алыштарындағы" батырлығы өсөн 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены менән наградланған.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Ваҡыт үтә килә, был юл Ебәк юлының төньяҡ тармағы булараҡ билдәлелек ала. Юл буйлап барғанда ҙур-ҙур каруандар туҡтап ял иткән, бихисап мал һәм кеше тапауынан әле булһа үлән үҫмәгән урындар күп.*



**Быуаттар дауамында халыҡ хәтерендә һаҡланып, телдән-телгә күсеп килгән халыҡ ижады ҡомартҡыларын өйрәнеү, төрлө варианттарын сағыштырып, һығымталар эшләү, уларҙа сағылдырылған ваҡиғаларҙы тергеҙеү маҡсатында төрлө фестиваль һәм байрамдар ойоштороу - барыһы ла ҡиммәтле ҡомартҡыларҙы тулы килеш киләһе быуындарға алып барып еткереү маҡсатында эшләнә. Бөгөнгө көндә эпос һәм легендаларға бәйле тағы ла бер йүнәлеш нығынып килә, ул - халыҡ ижады геройы юлы буйлап сәйәхәт итеү. Быйыл йәй айҙарында БСТ телеканалындағы "Эҙәрмән"дәрҙең "Ҡуңыр буға" эпосы геройы эҙҙәрен юллап ойошторған сәйәхәте лә уникаль проект, үҙенсәлекле ваҡиға булараҡ ҡабул ителде. "Эҙәрмән" телевизион тапшырыуының етәксеһе һәм сценарий авторы Гүзәл ХӘМИТОВА менән бөгөнгө әңгәмәбеҙ ошо проект тураһында.**

# “Ҡуңыр буға” юлынан тарих эҙҙәрен таптыҡ



## Изге юлдың башы

2003 йылда "Алтын мираҫ" проектын тормошҡа ашырған саҡта уҡ "Ҡуңыр буға" юлына ҡағылышлы күп һорауҙар тыуғайны. Ул ваҡытта мин "Ҡуңыр буға" һәм "Ҡәнифә юлы" бер үк юл, тигән фекергә килгәйнем. Ләкин тапшырыуҙан һуң редакцияға, шәхси үҙемә шылтыратыуҙар күп булды, байтаҡ хаттар килде һәм уларҙың күбеһе минең яңылыш һығымталар яһауым, "Ҡуңыр буға" юлын дөрөҫ асыҡламауым хаҡында белдерҙе. Шуға күрә был мәсьәлә яңынан тикшереүҙе һәм асыҡлауҙы талап итә ине, ләкин оҙаҡ ваҡыт уға ҡул теймәйерәк торҙо. Һәм быйыл, ниһайәт, уға кире әйләнеп ҡайтып, "Эҙәрмән" телевизион төркөмө менән "Ҡуңыр буға" юлын асыҡлау маҡсатында көсөргәнешле эшкә тотондоҡ. Беҙҙең юлыбыҙ Учалы районында башланып, Хәйбулла районында тамамланды. Шулай уҡ проект үҙ эсенә Белорет, Әбйәлил, Бөрйән һәм Баймаҡ районы сиген, Баймаҡ, Йылайыр райондарын да алды.

## Эпос һәм халыҡ хәтере - төп ярҙамсылар

"Ҡуңыр буға" юлын эҙләгәндә, тәү сиратта, эпосҡа таянып эш иттек. Унда һүҙ алып барылған географик атамалар һәм топонимик терминдар эҙләнеү юлындағы тәүге ярҙамсылар булды. Мәҫәлән, эпоста мал-тыуарын эҙләп юлға сыҡҡан Тандысаның Йылайыр йылғаһын кисеүе хаҡында мәғлүмәт бар. Тимәк, Тандыса Йылайыр йылғаһы аҡҡан хәҙерге Йылайыр районы территорияһы аша уҙған, тип әйтергә була. Шулай уҡ эпоста Һаҡмар йылғаһы ла телгә алына. Был да юлдың маршрутын асыҡ билдәләүсе күрһәткес булып тора.

Эпоста тағы ла Тандысаның юлда ҡарһаҡ туғаҙаҡ тауышын ишетеүе хаҡында ла әйтелә. Был ҡоштоң тик далала ғына йәшәүен иҫәпкә алғанда, "Ҡуңыр буға" юлының хәҙерге Хәйбулла яҡтарынан уҙыуын билдәләргә була. Шулай уҡ эпоста Алатау, Рәз һәм Ҡағы таштары хаҡында ла мәғлүмәт бар. Беҙҙеңсә, һүҙ бында бөгөнгө көндә Учалы районында урынлашҡан, Ирәмәл тауынан алыҫ булмаған Аратау һәм Белорет районындағы таштар хаҡында бара. Һуңғылары, ысынлап та, эпоста әйтелгәнсә, береһе юлдың - уң, ә икенсеһе һул яғында тороп ҡала.

Шулай уҡ маршрутыбыҙ ваҡытында телевизор ҡараусыларға "Ҡуңыр буға" юлы буйында урынлашҡан башҡа төрлө ер-һыу атамаларына ҡағылған мәғлүмәттәрҙе лә еткерҙек, халыҡ хәтерендә яҡшы һаҡланған тарих менән таныштырҙыҡ. Ғөмүмән, сәйәхәт барышында халыҡ тарафынан проектҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу ҙур булды. Беҙгә барыһы ла эскерһеҙ ярҙам итте, белгән мәғлүмәттәре менән ихлас уртаҡлашты. Халҡыбыҙҙың тарихҡа, халыҡ ижадына битараф түгеллеген күреү, уларҙан үҙебеҙгә ҡарата хуплау һүҙҙәре ишетеү, кәңәштәрен тыңлау башлаған эшебеҙҙе уңышлы атҡарып сығарыуҙа ҙур роль уйнаны. Айырыуса Учалы районынан Нәйрә һәм Зәйет Ғиләжевтарҙы, Белореттан Раян Келәмовты, Әбйәлилдән Данил Агилов, Иҙрис Ноғомановтарҙы, Ғәзим Усмановты, Йылайыр районынан Виктор Бугряковты, Хәйбулланан Рәсих Әхмәтовты, Юнир Минишевты иң әүҙем информаторҙар рәтенә индерер инем.

## "Ҡуңыр буға" юлы - бик боронғо юл

Был юл хаҡында беҙ башҡорт халыҡ эпосы аша беләбеҙ. Эпостан өҙөктәр беренсе тапҡыр 1863 йылда "Ырымбур губерния ведомостары"нда Р.Г.Игнатьев тарафынан баҫып сығарыла. Ә баҫма рәүешендә иң һуңғы тапҡыр донъя күргән вариантты 1969 йылда Әбйәлил районы Асҡар ауылынан Мөғәллим Мирхәйҙәровтан Рәшит Шәкүр яҙып ала. Беҙ эҙләнеү өсөн нигеҙ итеп нәҡ ошо вариантты алдыҡ. Тәү ҡарамаҡҡа, "Ҡуңыр буға" юлын башынан аҙағына тиклем уҙыу әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай, тип уйларға мөмкин. Ләкин был хата фекер, сөнки бөгөнгө көндә юлдың тулы маршруты хаҡында берәүҙә лә мәғлүмәт юҡ. Беҙгә ярҙам итеүселәрҙең һәр ҡайһыһы юлдың ниндәйҙер бер өлөшөн генә күрһәтә алды. Ни өсөн? Сөнки "Ҡуңыр буға" юлы башҡорт халҡы өсөн сит-яттар, дошман күҙенән нык һаҡлаған стратегик юл булған. Бының тап шулай икәнлеген төрлө ваҡытта булған ваҡиғалар ҙа асыҡ һөйләй. Мәҫәлән, Әбйәлил һәм Баймаҡ райондары сигендә тулыһынса яндырылған ауыл урыны бар. Уны башҡорттарҙан "Ҡуңыр буға" юлын күрһәтеүҙе талап итеп тә, яуап ала алмаған Тимашев юҡ итә. Шулай уҡ Ғәлим Хисамовтың "Тәфтиләү" романында ла дошмандарҙың юлды асыҡларға тырышып, башҡорт егетен ҡулға алып, уны язалауҙары, ләкин бер ниндәй ҙә мәғлүмәт ала алмауҙары хаҡында асыҡ яҙылған.

*Тәү ҡарамаҡҡа, "Ҡуңыр буға" юлын башынан аҙағына тиклем уҙыу әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай, тип уйларға мөмкин. Ләкин был хата фекер, сөнки бөгөнгө көндә юлдың тулы маршруты хаҡында берәүҙә лә мәғлүмәт юҡ. Беҙгә ярҙам итеүселәрҙең һәр ҡайһыһы юлдың ниндәйҙер бер өлөшөн генә күрһәтә алды. Ни өсөн? Сөнки "Ҡуңыр буға" юлы башҡорт халҡы өсөн сит-яттар, дошман күҙенән нык һаҡлаған стратегик юл булған. Бының тап шулай икәнлеген төрлө ваҡытта булған ваҡиғалар ҙа асыҡ һөйләй. Мәҫәлән, Әбйәлил һәм Баймаҡ райондары сигендә тулыһынса яндырылған ауыл урыны бар. Уны башҡорттарҙан "Ҡуңыр буға" юлын күрһәтеүҙе талап итеп тә, яуап ала алмаған Тимашев юҡ итә.*

Эпоста һүрәтләнгән ваҡиғалар хунн ҡәбиләләре йәшәгән осорға, беҙҙең эраның V-IV быуаттарына, ҡайтып ҡала. Ул ваҡытта әле башҡорттар дөйөм милләт булараҡ ойошмаған була, йәғни төрлө ҡәбиләләр булып йәшәп ятҡан була. Был ҡәбиләләр бер-береһен хәүеф-хәтәрҙәрҙән ҡурсалап йәшәгән һәм бер-береһенә ярҙамға йөрөгәндә үҙҙәренә генә билдәле юл буйлап хәрәкәт иткән. Тимәк, беҙ әлеге ваҡытта һүҙ алып барған "Ҡуңыр буға" юлы элек-электән билдәле булып, халыҡ ул юлды киң ҡулланған. Был осраҡта, элек юл ниндәй исем менән йөрөтөлгән һуң, тигән һорау тыуа. Беҙҙең эҙләнеүҙәр түбәндәге факттарҙы асыҡлауға килтерҙе.

Бик боронғо замандарҙа, ашар аҙыҡ һәм эсәр һыу эҙләп, кешеләр ҙур территорияларҙы ҡыҙырыр булған. Боронғо кешеләрҙең маршруты әлеге беҙ йәшәгән төбәктәрҙе лә урап үтмәгән, әлбиттә. Улай ғына ла түгел, боронғо кеше нәҡ ошо юлды үҙ эсенә алған маршрут буйлап хәрәкәт иткән һәм үҙ юлындағы төрлө мәмерйәләрҙә һүрәттәр ҡалдырған. Ошондай һүрәттәр туплаған мәмерйәләрҙең иң боронғоһо - беҙҙең данлыҡлы Шүлгән мәмерйәһе. Артабанғы һүрәттәр буйынса был юл үҙ эсенә Күгәрсен районындағы Мораҙым мәмерйәһен, Силәбе өлкәһендәге Игнатьев мәмерйәһен, Франциялағы Ласко мәмерйәһен алыуын асыҡларға мөмкин. Шулай итеп, тәү сиратта, был юлды палеолит осоронда йәшәгән иң боронғо кешеләр Урал һырты буйлап һалған, тип әйтеп үтергә кәрәк, йәғни уны миграция юлының бер өлөшө, тип билдәләп була. Быны Урал һыртынан алыҫ булмаған арауыҡта урынлашҡан мәмерйәләр сылбыры һәм ундағы һүрәттәр иҫбатлай. Мәҫәлән, билдәле Шүлгәнташ, Иҫке Мораҙым, артабан Игнатьев мәмерйәләренең барыһы ла Урал һыртынан 50-80 саҡрым ерҙә урынлашҡан. Шулай уҡ был юлдың миграция юлы булыуын бер-береһенән алыҫта урынлашҡан мәмерйәләрҙәге һүрәттәрҙең оҡшашлығы ла асыҡ һөйләй. Мәҫәлән, Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр менән Францияның Ласко мәмерйәһендәге һүрәттәрҙең уртаҡлығы билдәле. Был хаҡта үҙенең "Палеолит хазинаһы" тапшырыуында Салауат Хәмиҙуллин да билдәләп үтте. Әйтеп китергә кәрәк, бындай күсеп йөрөүҙәр ваҡытында улар хәрәкәт итеү өсөн еңел һәм ҡулай юл һайлай белгән.

Ваҡыт үтә килә, был юл Ебәк юлының төньяҡ тармағы булараҡ билдәлелек ала. Бының, ысынлап та, шулай икәнлеген дәлилләүсе факттар етерлек. Мәҫәлән, юл буйлап барғанда ҙур-ҙур каруандар туҡтап ял иткән, бихисап мал һәм кеше тапауынан әле булһа үлән үҫмәгән урындар күп.

**✓ Юлдың аныҡ һәм тулы маршруты юҡ, ул бары тик ориентирҙарға ғына таянып барған юл. Тәбиғәтте яҡшы аңлаған һәм эпосты белгән кеше "Ҡуңыр буға" тип исемләнгән юлды бер ҡыйынлыҡһыҙ үтәсәк.**

# БАРЫП...

## "Ҡуңыр буға"мы, әллә "Ҡуңыр һыйыр"мы?

"Эҙәрмән" проектын тормошҡа ашарыу барышында алдыбыҙға ҡуңыр буға түгел, ә ҡуңыр һыйыр ("Дорога бурой коровы") үткән юлды табыу, тигән маҡсат алдыҡ. Әлбиттә, беҙҙең был аҙымыбыҙ күптәр тарафынан яҡлау тапманы һәм кире ҡағылды. Ләкин беҙ үҙ фекеребеҙҙән тайшанманыҡ һәм ижади төркөм менән нәҡ ҡуңыр һыйыр үткән юлды уҙҙыҡ, тип белдерәбеҙ. Беҙ эпосты "Ҡуңыр буға" (буға - үгеҙ) исеме аҫтында беләбеҙ һәм, тәбиғи, юлды ла шулай йөрөтәбеҙ. Эпос йөкмәткеһенә күҙ һалғанда ла, һүҙ унда быҙауҙарын эйәртеп, тыуған яҡтарына ҡайтҡан үгеҙ хаҡында бара. Ләкин донъяуи, логик ҡараштан сығып ҡарағанда, үгеҙҙең көтөүҙе эйәртеп ҡайҙалыр ҡасып барғанлығын күҙ алдына килтереп булмай. Эйе, ул һыйырҙарға баш, быҙауҙарға хужа, әммә ләкин бер ниндәй ҙә үгеҙ көтөүҙе үҙе артынан әйҙәмәй һәм ҡайҙалыр алып китмәй. Был үгеҙ тәбиғәтенә хас түгел һәм быны берәү ҙә инҡар итмәҫ, тип уйлайым. Күп осраҡта был роль һыйыр өҫтөнә "төшә". Шуға күрә эпоста һөйләнгән ваҡиғалар ҡуңыр һыйырға барып бәйләнеүенә шик юҡ. Ә ни өсөн был осраҡта эпос "Ҡуңыр буға" тип атала һуң? Быға ике төрлө аңлатма бирергә мөмкин.

Алдан әйтеүебеҙсә, был юлдың башы бик боронғо замандарға барып тоташа. Мәҫәлән, Баймаҡ районы Темәс ауылы янындағы Рапат тауы нәҡ ошондай каруандар туҡтаған урын булған. Шулай уҡ башҡа урындарҙа ла каруандар торған урындарҙы асыҡ күрергә мөмкин.

Беҙҙең замандарға иһә юл "Ҡуңыр буға" исеме аҫтында килеп еткән. Шулай уҡ бөгөнгө көндә халыҡ араһында ул икенсе төрлө - "Күс юлы" булараҡ та атап йөрөтөлә, сөнки XX быуаттың 30-сы йылдарына тиклем башҡорттар нәҡ ошо юл буйлап йәйләүгә сығыр булған. Юлдың тағы ла бер атамаһы - "Тоҙ юлы", сөнки һатыу өсөн тоҙҙо нәҡ ошо юл буйлап ташығандар.

Шулай итеп, әлеге юлдың нигеҙе бик боронғо замандарға барып тоташа һәм ҙур тарихҡа эйә. Үҙенә бик күп ваҡиғалар шауҡымын туплаған, меңәрләгән кеше яҙмышына шаһит булған, барыһы ла ишетеп белгән, ләкин әле булһа бөтәһе өсөн дә серле булып ҡалған юл үҙ өйрәнеүселәрен көтә. Ләкин шуны билдәләргә кәрәк, был юлды бер ҡасан да тулыһынса өйрәнеп бөтөү мөмкин түгел һәм һәр эҙләнеүсе унда үҙе өсөн яңы асыштар табасаҡ.

## "Ҡуңыр буға" һәм "Ҡәнифә" юлдары. Улар бер үк юлмы?

"Эҙәрмән"дәрҙе юлға әйҙәгән һорауҙы асыҡлау өсөн беҙҙең төркөмгә меңәр саҡрым юл үтергә, бихисап көс сарыф итергә тура килде, ләкин эшебеҙҙең һөҙөмтәһе барыһын да аҡланы, тип тулы ышаныс менән әйтә алам. Шулай итеп, күптәрҙе борсоған һәм ҡыҙыҡһындырған - "Ҡуңыр буға" һәм "Ҡәнифә" юлдары бер үкме, әллә икеһе ике төрлө юлмы, тигән һорауға беҙҙең ижади төркөм яуап тапты. Бөгөнгө көндә тулы ышаныс менән мин уларҙы, икеһе ике төрлө юл, тип әйтә алам.

Риүәйәттәргә күҙ һалғанда ла уларҙың килеп сығышы ике төрлө ваҡиғаға һәм осорға бәйле. "Ҡуңыр буға"ла бер кемдән дә ҡасмаған, ә бары тик мал-тыуарын эҙләп юлға сыҡҡан Таңдыса тыуған яғына Башҡортостандың төньяғынан, йәғни Екатеринбург, Миәс яҡтарынан юлға сығып, төбәктең дала районларын киҫеп үтеп, көньяҡҡа, йәғни Арал диңгеҙе яғына сығып китә һәм, әйтеп үтеүебеҙсә, ундағы ваҡиғалар беҙҙең эраның V-IV быуаттарына барып бәйләнә. Ә "Ҡәнифә юлы"ндағы ваҡиғалар иһә күпкә һуңғараҡҡы ваҡытты, беҙҙең эраның XIV-XV быуаттарын, үҙ эсенә ала. Был легендаға ярашлы, барымта менән башҡорт ерҙәренә килгән ҡаҙаҡтар тарафынан урланған башҡорт ҡыҙы тыуған яҡтарына ҡасып ҡайта. Уның да үҙенә яңы юл һалмайынса, булған юлдан уҙыуын билдәләргә кәрәк, сөнки "Ҡәнифә юлы" ла бик боронғо юл. Был хаҡта юл буйында осраған боронғо кешеләрҙең туҡталҡалары асыҡ һөйләй. Шулай итеп, "Ҡуңыр буға" эпосында, юл Урал һырты буйлап үтә, тип әйтелһә, "Ҡәнифә юлы" легендаһында иһә ул Ирәндек һыртын үҙ эсенә ала. Ә Баймаҡ районы Темәс ауылы янында был юлдар бер-береһенә ныҡ яҡын килеп, яңынан айырылып китә, ләкин улар бер урында ла киҫешмәй. Шуға күрә был яҡтарҙа ҡайһы берәүҙәр ике юлды берләштереп ҡарай, ә икенселәр иһә "Ҡуңыр буға" юлы бөтөнләй юҡ, бары тик "Ҡәнифә юлы" ғына бар, тип һанай. Тик ике фекер ҙә дөрөҫлөккә тап килмәй. Был юлдар параллель урынлашҡан, әммә икеһе ике төрлө юл. XIII быуатта был яҡтар Алтын Урҙа хакимлыҡ иткән территориялар була. Нәҡ ошо осорҙа монгол-татарҙар үҙҙәренең көтөү-көтөү үгеҙҙәрен йәйгелеккә әлеге Башҡортостан территорияһына ҡыуыр булған, тимәк, был юл әллә нисә быуыт элек үгеҙ көтөүҙәре, йәғни буғалар йөрөгән юл булған. Был хаҡта беҙгә Сибай ҡалаһында йәшәүсе ғалим Юнир Минишев бәйән итте. Икенсе яҡтан ҡарағанда, башҡорттарҙа нәҫелде дауам итеүсе, быуындар бәйләнешен өҙмәүсе итеп тик ир-егеттәрҙе һанайҙар. Шуға күрә эпостың һәм юлдың нәҡ ир-ат башланғысынан сығып, йәғни, буға булараҡ исемләнеүенә аптырарға түгел.

Шулай итеп, беҙҙең ижади төркөм бер ай эсендә меңәр саҡрым юл үтеп, серле "Ҡуңыр буға" юлын асыҡларға тырышты. Оҙайлы эҙләнеүҙәрҙән һуң беҙ, юлдың аныҡ һәм тулы маршруты юҡ, тигән фекергә килдек, сөнки ул бары тик ориентирҙарға ғына таянып барған юл. Шуға күрә тәбиғәтте яҡшы аңлаған һәм эпосты белгән кеше "Ҡуңыр буға" тип исемләнгән юлды бер ҡыйынлыҡһыҙ үтәсәк, тип уйлайым. Юлды эпостан айырып ҡарарға ярамай, сөнки улар бер-береһен тулыландырып килә һәм, әлбиттә, эпос иң киң мәғлүмәт биреүсе сығанаҡ булып тора. Ғөмүмән, "Ҡуңыр буға" эпосы һәм, тәбиғи, юлы ла беҙҙең милли байлыҡ һәм тарихи мираҫ. Беҙ уларҙы республика, башҡорт халҡы бренды итергә һәм донъяуи кимәлдә үҙ урынын алырға ярҙам итергә бурыслыбыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлегә тиклем "Ҡуңыр буға" юлының айырым өлөшөн генә табырға тырышыуҙар булды, ә бөтә республикала ғына түгел, ә Рәсәй, сит ил кимәлендә үҙенә оло ҡыҙыҡһыныу уятҡан масштаблы проекттар тормошҡа ашырылманы. Был йәһәттән "Эҙәрмән"дәрҙең эше баһалап бөткөһөҙ, сөнки тарихи нигеҙебеҙ булған эпос һәм легендаларҙы өйрәнеү һәм киләһе быуынға тапшырыу формаль ҡағыҙ күсереп яҙыуға ғына ҡайтып ҡалырға түгел, ә ошондай ҡыҙыҡлы һәм фәһемле проекттар ярҙамында ла тормошҡа ашырылырға тейеш. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ фекеренсә, үҙендә бик күп мәғлүмәт туплаған халҡыбыҙ ижады үткәнебеҙҙе яҡшыраҡ аңларға, бөгөнгөбөҙҙө баһаларға һәм киләсәгебеҙҙе күҙалларға ярҙам иткән ғәжәп бай сығанаҡ ул.**

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ФЕКЕР ҠОРО

# ШӘЖӘРӘҢДЕ ГЕНӘ ТҮГЕЛ,

## риүәйәттәреңде лә бел!

**Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев: "Һәр башҡорт йондоҙҙарҙы, шәжәрәһен һәм өләңдәрҙе (йола, риүәйәт, легенда- Ред.) белергә тейеш", тигән. Ә бөгөнгө көндә ошо ғәмәлдәрҙе белеү, үтәү беҙгә нимә бирә?**

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ, профессор, филология фәндәре докторы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:** Бик дөрөҫ әйтелгән һүҙҙәр былар. Һәр башҡорт нәҫел, ҡан буталмаһын өсөн үҙенең затырыуын, нәҫел ебен, шәжәрәһен белергә тейеш. Совет заманында шәжәрәгә ҡарата булған битарафлыҡ, уны иҫәпкә алмау хатта аталаш кешеләрҙең өйләнеү осраҡтарына алып килде. Был ҡот осҡос күренеш. Шуға күрә бөгөнгө көндә халҡыбыҙҙың шәжәрәгә иғтибарын арттырыуын күреү ҡыуаныслы күренеш.

Шәжәрәне яҡшы белгән кеүек үк, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын, йолаларын да хәтерҙә тоторға, уларҙы өйрәнергә һәм киләсәк быуынға еткереү өсөн барыһын да эшләргә тейешбеҙ. Легенда һәм риүәйәттәр халҡыбыҙҙың яҙылмаған тарихын сағылдырыусы ҡиммәтле сығанаҡтар. Шулай уҡ уларҙың күбеһе тыуған төйәгебеҙҙәге ер-һыуға исем биреүсе лә булып тора. Ә ул атамалар, үҙ сиратында, тыуған ерҙең паспорты ролен үтәүсе ул. Һуңғы ваҡытта килгән-киткән кешенең ер-һыуға ҡолаҡҡа ятмаған, башҡортҡа ҡағылмаған атама биреү күренеше күбәйеп китте. Быға юл ҡуйырға ярамай. Ҡайһы бер ерҙәрҙә хатта башҡорт халҡында элек-электән йәшәп килгән ер-һыу атамаларын да үҙгәртеүҙе бер ни күрмәйҙәр. Мәҫәлән, "Киске Өфө" яҙып сыҡҡайны был хаҡта: ситтән килгән, сит милләттән булған ниндәйҙер ғалимә Бөрйән мәмерйәләренә үҙ исемен ҡушып йөрөп ята икән. Сибай ҡалаһы янында урынлашҡан, әллә күпме быуат "Төйәләҫ" исеме аҫтында йөрөгән һыу ятҡылығына ҙур итеп "Худолаз" тип яҙып ҡуйғандар. Шул уҡ "Игнатьев" тип йөрөтөлгән мәмерйәнең дә икенсе төрлө исеме бар - ул Ямаҙы-таш. Ғөмүмән, риүәйәт, легендаларыбыҙҙы, уларҙан сығып ҡушылған ер-һыу атамаларын белеү генә аҙ, тәү сиратта, уларға хөрмәт менән ҡарарға өйрәнеү бурысы тора алдыбыҙҙа. Һәм башҡаларҙан да ошоно уҡ талап итеү мөһим.

**Һиҙиәт ХӘБИБУЛЛИН, Күгәрсен районы, хаҡлы ялда:** Үҙ шәжәрәһен белмәгән башҡорт йәл миңә, сөнки ул үҙенең тамырын белмәй, тимәк, ерҙә лә ныҡ баҫып тормай, тигән һүҙ. Дыңғырҙап торған буш мискә ишеләй ҡоро, һыуға сарсаған гөл шикелле, ата-бабаларынан быуындар аша күсеп килеүсе, йәшәүгә дәрт өҫтәүсе шифалы һутҡа һыуһаған ундай кешенең күңеле. Үҙ үткәненә ихтирамлы һәм иғтибарлы була белгәндең бөгөнгөһө һәм киләсәге лә ныҡлы була. Шуға күрә, һәр башҡорттоң үҙ шәжәрәһен күҙ ҡараһылай һаҡлап, өйрәнеп, балаларға өйрәтеп, тулыландырып тороуы уның изге бурысы, тип һанайым.

Өләңдәргә, йәғни риүәйәт, легенда, йолаларға килгәндә лә ошо уҡ фекеремде йөпләйем. Халҡыңдың хазинаһы булған ауыҙ-тел ижады өлгөләрен белеү үҙен башҡортмон тип иҫәпләгән һәр кеше өсөн мотлаҡтыр, тип уйлайым. Бындай ҡомартҡыларға уйҙырма итеп ҡарау дөрөҫ түгел, улар теге йәки был дәрәжәлә төрлө ваҡыттағы ваҡиғаларҙы сағылдырыусы сығанаҡтар. Уларҙа һүрәтләнгән ваҡиғалар ауазы бөгөнгө көндә лә асыҡ сағыла. Мәҫәлән, теге йәки был легенда, риүәйәттәге хәл-ваҡиғаларға, ундағы геройҙарға бәйле ер-һыу атамаһы бихисап. Тимәк, беҙҙең йәшәйеш ошо өләңдәр менән тығыҙ бәйләнгән һәм беҙгә уларҙы инҡар итергә ярамай, сөнки был үҙ булмышыңдан баш тартыу, тигән һүҙ.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ, журналист:** Үҙ асылыңды, тамырыңды, генетик сығышыңды, йәғни шәжәреңде белеү мотлаҡ. Быны ябай ғына ағас миҫалында ҡарарға мөмкин. Ағастың олоно, ботаҡтары, япраҡтары, унан килеп емештәре бар икән, тимәк, тамыры ныҡ, йәғни тамыры булмаһа, күкрәп үҫеп ултырған йәшел ағас та булмаҫ ине. Кешегә ҡарата ла ошоно уҡ әйтеп була, йәғни барыһы ла тамырға барып тоташа. Бөгөн һин барһың икән, тимәк, һинең тамырың, башланғысың булған. Был - бер. Икенсенән, киләсәгеңде булдырыу өсөн дә тамырыңды, йәғни шәжәрәңде белеү фарыз. Шәжәрәне белмәү яҡын туғандар араһында ғаилә ҡороуға алып киләсәк, ә был, үҙ сиратында, тоҡомда ауырыу балалар тыуыуға килтерәсәк. Быға юл ҡуйырға ярамай, сөнки был нәҫел ҡороуына, тимәк, милләт бөтөүгә килтерергә мөмкин.

Фольклор, ауыҙ-тел ижады, йолалар кешенең рухын тәрбиәләй, ғәҙәтен барлыҡҡа килтерә, холҡон, тимәк, булмышын формалаштыра. Ә кешенең йәмғиәттә үҙ урынын табыуы һәм лайыҡлы тормошта йәшәүе һанап кителгән сифаттарға бәйле. Шулай уҡ өләңдәр беҙгә үткәнебеҙҙе, тарихыбыҙҙы һөйләүсе сығанаҡ булараҡ та ҙур әһәмиәткә эйә.

Башҡорттар элек-электән йондоҙҙарҙы аңлаған, уларға ҡарап төрлө ваҡиғаларҙы күҙаллар булған. Мәҫәлән, мең йылға бер тапҡыр килеп тороусы ҡара ҡыштарҙы ла башҡорттар, бары тик йондоҙҙарҙы аңлау һөҙөмтәһендә, имен-аман йырып сыға алған. Башҡа ҡәбиләләр аслыҡтан, һыуһыҙлыҡтан интегеп, Ер йөҙөнән юҡҡа сыҡҡан ваҡытта, беҙҙең халыҡ тере ҡалған.

Ошо өс шартты үтәгән осраҡта, халҡыбыҙ һаҡланып ҡаласаҡ, ә инҡар итеү, аңламау, милләткә юҡҡа сығыу ҡурҡынысы менән янай.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

***✓ Унан һуң иң ҡурҡҡаны килде: ниһәйәт, түҙемлеге шартлап өҙөлгән бей тиҫкәренең үксәһен ярырға бойорҙо. Аһ, нисек түҙҙе икән шул мәлдә? Ауыртыуға түгел, ә үкенес менән йөрәк әрнеүенә.***






Баянан бирле шым ултырған Сынға бей ошо урында, артыҡ төпкә төшөп бараһың, тине буғай, Астанға өҙөп кенә ниҙер әйтте лә, бармағы менән янап ҡуйҙы. Эйе, Ғайса яңылышманы, ул башҡорт телен яҡшы белә ине. Сатырҙан сығып барышлай хужа тылмасын тағы бер ҡат киҫәтте. Нимәһенә шулай ҡапыл ғына һеркелдәп китте һуң әле? Үҫмер быныһын аңлап етмәне. Күкрәгенә ҡулын һалған тегеһе, еңелсә баш эйеп, ризалыҡ белдергән булды.

Ҡымыҙ эсеп, бер аҙ баш-күҙ алған Ғайсаны ҡайҙалыр алып киттеләр. Сандыр кәүҙәле Астан ашыҡмай ғына алдан бара, ә арттарынан - һөңгө тотҡан ике һағауыл килә. Бер аҙҙан, тәржемәсе менән икеһе, еүеш һалҡынлыҡ ҡатыш ауыр күк еҫе аңҡып торған таш зинданға төштөләр, һағауылдар тышта тороп ҡалды.

-Мына, ҡустысы, хәҙергә ҫинең өйөң ошбу пулыр, - Астан мөгәрәпкә тартым зинданды беренсе тапҡыр күргән кеүек күҙҙән үткәрҙе, - бер аҙ күнеккәнсе һаҡ аҫтында ултырып торорға тура килер. Аҙаҡ ҡарарбыҙ...

-Мине бикле көйө, өҫтәүенә һаҡ аҫтында тоторға һеҙҙең ни хаҡығыҙ бар? Мин һеҙгә енәйәтсе түгел дә, - Ғайса әрепләшеп маташты.

-Көстөнөкө замана, егет, шуны онотма... - Аптыраған Ғайса таш бүкәнгә ултыра төштө. -Ҫин, ҡустым, үҙеңдеүҙең ашап ныҡ бөтөрөнмә. Баштараҡ мин дә шулай иткәйнем, аҙаҡ үкендем. Яйҙап өйрәнәҫең икән ул.

-Өйрәндең? Үҙең ҡайһы яҡтан һуң?

-Дим буйҙарынан мин...

-Ни сәбәптән илеңдә түгелһең?

-Ҫинең кеүек үк килеп юлыҡтым мынта. Бестең яҙмыштар оҡшаш.

- Юҡ! Мин һиңә оҡшарға теләмәйем! Һин илеңде һатып, тыуған ереңде онотҡанһың.

-Нимә ҫөйләйҫең, маңҡа малай? Үҙем мынта йәшәҫәм тә - күңелем һәр саҡ тегендә пулты минем. Тыуған илемде мына мынта йөрөтәмен, - сырайы һытылған Астан уң ҡулын йөрәгенә баҫты. - Илемде ҫатҡан, имеш. Гонаҫынан ҡурҡыр инең...

* * *

Был яҡтарға килеп юлығыуына байтаҡ ваҡыт үтеп китеүгә ҡарамаҫтан, Ғайсаны төнгөлөккә һаман ярым ҡараңғы зинданға ябалар ине. Ярай әле, көндөҙҙәрен яҡтыға сығарып йөрөтәләр. Ошондай мәлдәрҙә Сынға бей уны үҙ янындараҡ тоторға тырыша, яғымлы ғына мөғәмәлә итә. Тотҡон шулай уҡ ашау яғынан да наҡыҫлыҡ тоймай. Бының сәбәбен ул һуңыраҡ беләсәк...

Ошо арала Ғайса элек аңлай алмаған күп нәмәгә төшөндө. Мәҫәлән, яҡын туғандарың эргәңдә булғанда уларҙың ҡәҙерен тулы мәғәнәһендә белеп етмәйһең икән. Хәйер, ирекле тормош менән дә шул уҡ хәл инде. Ирек ҡәҙерен зинданда ултырғанда ғына тояһың. Ана, ун йәше тулыр-тулмаҫ Астан ағайҙы ла бынан утыҙ йыл элек ҡаҙаҡ барымтасылары алып киткән булған. Ул, тәҡдир менән ризалашмайынса, бер нисә тапҡыр ҡасып китергә маташып ҡараһа ла, килеп сыҡмаған. Ауыҙлыҡлап тота алмаҫтарын аңлап, йәндәре көйгән ҡаҙаҡтар үҫмерҙе үҙҙәре иң ҡаты һанаған язаға тарттырған - ике үксәһен дә телеп, шул яраға туралған ат ҡылы тултырған. Аҙаҡ, яраһы уңалһа ла, үксәләренә баҫыу түгел, табанынды ергә терәүе лә ҡот осҡос ауыртыу тыуҙыра икән. Иҫ китмәле ғазаптарға дусар ителгән Астан, ахырҙа, әсе яҙмышына буйһонорға мәжбүр булған. Ошонан һуң ғына уның үксәләрен ҡылдан таҙартып, ҡаҙаҡ ҡыҙына өйләндергәндәр. Уларҙың береһенән-береһе таҙараҡ бәһлеүән ете улы һәм сибәрҙәрҙәнсибәр бер бөртөк кенә ҡыҙҙары тыуған. Шуның өсөн һуңғараҡ, ҡасып китер мөмкинселек булһа ла, Астан быны эшләй алмаған. Бала - ҡайҙа ла бала инде, нисек ташлап китмәк кәрәк?..

-Эй-йе, балдар ныҡ йәл ине, ҡатынымды ла йәлдәнем: минһеҙ ни эшләй ала улар. Атайлы көйөнсә етем булмаҫындар, тинем, - Астан ошо рәүешле хәтирәләргә бирелеп ултырырға ярата, - тулы исемем тә минең Астан түгел бит ул, ә Арыҫлангәле. Йәнә лә, ҫин мине бушҡа рәнйеттең, ҡустым, мин сатлыҡ түгел, мин мында ирекҫеҙҙән...

-Бигәйбә, Арыҫлангәле ағай. Ғәфү үтенәм, - аяныс яҙмышлы ағаһын ҡыҙғанып ҡуйған Ғайса уның алдында уңайһыҙлыҡ тойғоһо кисерә. Аҙаҡ үҙе: "Үҙемде лә әллә шундай уҡ тәҡдир көтәме?" - тип әсенде.

-Ғайса, ҫин миңә ҡарағанда күпкә бәхетлеҫең әле, - Астан малайҙың яурынына ҡағылып ала.

-Ниңә улай тиһең, - тегеһе урынлы ғәжәпләнә, - бикле ултырған көйө бәхетле булып буламы?

-Мине заманында ныҡ рәнйеттеләр. Ҡул менән дә, тел менән дә. Ә ҫиңә Сынға бей үҙе хөрмәт күрҫәтә.

-Аңламаным?

-Ул гонаһһыҙ малай хаҡ бәйғәмбәр исемен йөрөтә. Уны кәмһетеп тел тейҙермәгеҙ, ҡул менән тә ҡағылаҫы булмағыҙ, ти.

-Ана нисек...

-Шулай, өҫтәүенә ярата ул ҫине. Яуҙа ҫәләк булған углына ошата...

Быныһы Астандың малай алдында яҡшатланыуы булдымы, әллә, ҡасып китә күрмәһен, тип өгөтләүеме - Ғайса аҙағынаса төшөнөп етмәне.

* * *

Көндәрҙең береһендә Сынға бей бар ҡышлаҡты Ҡөрьән мәжлесенә йыйҙы. Ҡырҡмыш тай һуйып, оло ҡаҙан ит һалынды. Бейҙең мәрхүм улы рухына Ҡөрьән аяттары бағышлап бөтөүгә табын әҙер ине инде. Һалбыр мыйыҡ Ҡыҙрай менән уның эшнәһе ҡапҡорһаҡ Боға шапшоп килеп ит турарға тотондо. Күп тә үтмәҫтән, аҡ сатыр уртаһына ҡуйылған оҙон тәпәш һике өҫтөндә боҫорап ятҡан ит тауы хасил булды. Дәрәжәгә ҡарап ҡына, һике тирәләй урын алдылар: байҙар хужаға яҡыныраҡ, уларынан ары - хәлләрәктәр, ә йыйын ярпыға урындың иң шәбе эләкте - тышта асыҡ һауа аҫты. Аш доғаһы ҡылыныуы менән ҡулдар ит тауына ҡарап һонолдо.

Йәш булыуға ҡарамаҫтан, һимеҙ, йомшаҡ итте сәйнәп тә тормаҫтан йоталар кеүек. Майланған ҡулдарҙы ситек ҡуңыстарына, йәнәш ятҡан йүгәндәргә генә һөртөп ҡуялар: май ҙа - дәүләт, әрәм булмаһын. Күҙгә күренеп кәмей барған ит тауы урынында тиҙ арала эреле-ваҡлы һөйәк өйөмө ятып ҡалды, һөйәкте ҙур ашъяулыҡҡа төрөп, ярлыяғаға сығарҙылар: әйҙә, мөнйөп кинәнһендәр. Ә инде уларынан ҡалғаны - аслы-туҡлы көн күргән эттәргә. Шул рәүешле, хәләл малдың бер нәмәһе лә әрәм булманы. Ошо ғәмәлде ситтән генә күҙәтә ултырған Ғайсаның башынан шундай уй үтеп китте: "Беҙҙә булһа, шәт, улай итмәҫтәр ине. Ҡөрьән ашы беҙҙә, кешенең хәл-торошона ҡарамай, барыһына ла тигеҙ һәм ғәҙел бүленә..."

Аш аҙағында эселгән ҡымыҙ быуынына төшөүҙән ирәйеп киткән Сынға бей Ғайсаны бармаҡ ишараһы менән янына саҡырып алды ла, йәнәшәһенән урын тәҡдим итте. Тегеһе, ҡалайтһын, аяҡ салып уның ҡаршыһына ултырырға мәжбүр булды: тыңламаһаң, хәҙер һалҡын мөгәрәпкә төшөрөп ябырға ҡушасаҡ. Астан-тылмас та шунда уҡ улар эргәһенән урын ала һалды.

-Йә, оғлым, таш зиндан ялҡытманымы? - күҙҙәре ҡыҫыла төшкән бей йылмайғандай итте.

-Ялҡыта, тип, ни хәл итмәк?.. - асыҡтан-асыҡ мыҫҡылдан Ғайсаның һарыуы ҡайнай башланы.

-Үҙеңде тәртипле генә тотһаң, шул етер ине, - кинәт етдиләнеп киткән Сынғаның йөҙө ҡырыҫ төҫ алды, - ә һин һаман ҡарышаһың. Мин ундайҙарҙы яратмайым.

-Ә мин бик аҫтында ултырыуҙы ярата тиһеңме?..

-Кәләш алып бирермен, - бей уны ишетмәгән һымаҡ һүҙен дауам итте, - үҙ балам урынына күрер инем мин һине. Тағы ни кәрәк? Әйт...

Ҡапылғара ҡаушай төшкән Ғайса йәйрәп алдында ултырған тулы кәүҙәле йоп-йоморо бейгә текәлде: имеш, балаһы урынына күрер ине берәү. Шул саҡ, таҡыр башына хажи сәлләһе урап, күпереп торған бөҙрә һаҡалын һыйпаштыра биреп ултырған йөнтәҫ ҡашлы ҡарт бей уға нисектер йәл булып китә.

-Их, Сыңға апа, - тип ауыр һулай Ғайса, - һинең үҙеңде ошо, ҡылғандан башҡа үлән дә үҫмәгән шыҡһыҙ даланан айырырға ла, беҙҙең Уралтау яҡтарына апарып бикләргә ине. Нисә көн түҙеп торор инең икән?

Уның малайҙарға ғына хас бер ҡатлылыҡ менән әйтелгән ошо һүҙҙәренән күҙҙәре упайған Сыңға, ни тип яуап бирергә лә белмәйенсә, йөмерәйгән ҡаштары аҫтынан яман ҡарап ултырҙы. Әлеге ҡараштан Ғайсаның хатта арҡа буйы зымбырлап китте: уйламайса, әллә артығыраҡын ысҡындырҙы инде. Ахыры, ысынлап та шулай булды, күҙ алдында буҙарынып киткән бей ҡул ишараһы менән генә үҫмерҙе зинданға кире илтеп ябырға ҡушты.

-Ах, һин, Күк бүре тоҡомо! - Ғайса сығып барғанда ул саф башҡортсалап ыҫылданы, - Урал бүреһе!

Баҡһаң, тәржемәсене исем өсөн генә тота икән! Йәнәһе лә, иштәк телендә бер ни аңламай. Бәлки, шул рәүешле Астандың тоғролоғон һынамаҡсы булғандыр әле. Уның ише эсе ҡара бейҙәргә ышанһаң...

* * *

Бер төрлө, шуның өсөн дә ифрат ялҡыттыҡ көндәр туҡтауһыҙ ағыла торҙо, ә Ғайсаны һаман бик аҫтында тоттолар. Ике йәйен ошолай үткәргән үҫмер инде егет ҡорона керҙе: тауышы бермә-бер олпатланһа, һыҙылып мыйығы беленде. Шулай ҙа ул сиге-ҡырыйы күренмәгән шыҡһыҙ далаға эҫенә лә, берегеп тә китә алманы. Ул һыңа ла түгел, өс тапҡыр ҡасырға маташты - тоттолар. Бер ышығы булмаған ҡола ялан ерҙә йәйәү көйөнә ҡасып ҡайҙа бараһың инде? Менеп сабыр атың булғанда тағы бер хәл. Тик тотҡонлоҡтан ҡотолоу теләге менән янған егетте йылҡылдашып торған арғымаҡтарға яҡын да ебәрмәйҙәр ине.

Ғайса тирәһендә йыш уранғыланған сибәр ҡыҙ Уҡабикә лә уның күңелен яулай алманы. Көслөк менән өйләндереп, ҡушырға маташыуҙарына үҫ итеп, тағы башы һуҡҡан яҡҡа сығып китте. Тағы алып ҡайттылар. Был юлы уның "башбаштаҡлығы" эҙһеҙ үтмәне: Сыңға әмере буйынса ныҡ ҡына итеп туҡмап ташланылар. Хатта ике тәүлек буйына ҡуҙғала алмайынса ятты. Унан... Унан һуң иң ҡурҡҡаны килде: ниһәйәт, түҙемлеге шартлап өҙөлгән бей тиҫкәренең үксәһен ярырға бойорҙо. Аһ, нисек түҙҙе икән шул мәлдә? Ауыртыуға түгел, ә үкенес менән йөрәк әрнеүенә.

Бына бер йылдан ашыу инде Ғайса аяҡ остарына ғына баҫып йөрөй. Йөрөй, тип әйтеүе генә рәхәт: ауырлыҡ менән яһалған һәр аҙымы - мең ғазап. Хәҙер инде, рух төшөнкөлөгөнә бирелеп, ҡасып ҡотолоу хыялынан төңөлә биреп ҡуйған саҡтары ла булманы түгел, булды, әммә, шул әҙере асылына ҡайта ине. Уны әле бары өмөт кенә йәшәтә һәм һаман ниндәйҙер мөғжизәгә ышана. Күңеленә ниҙер һиҙҙереп тора: ул ҡасан да булһа барыбер йәнтөйәгенә ҡайтасаҡ! Әҙәм рәүешле атлап йөрөй алмағанлыҡтан, Ғайсаны хәҙер төнгөлөккә мал урынына ябып ҡуймайҙар. Хәҙер уның ҡасып бер ҡайҙа ла бара алмаҫына шиктәре юҡ. Ярыҡ табан уға ана шул "рәхәтлекте" килтерҙе. Хәйер, күрер күҙгә егет үҙе лә бер сама күндәмләнеп киткән кеүек. Ә хәтере ҡалған Сыңға бей уны, яҡшылыҡты аңлай белмәгән арҡыры малайҙы, тирмәһенә яҡынлатмай. Шунлыҡтан, Ғайса күберәген ялсылар тирәһендә көн итә. Эйе, эйе, ул бында йәшәмәй, бары көн итә. Хәленән килгәнсе ваҡ-төйәк эштәрҙе башҡарып ҡына тамаҡ туйҙырыу арҡаһында ярты ғүмерен аслы-туҡлы үткәрергә мәжбүр. Торған бер ғәрипкә йүнле кәсебе табыламы...

* * *

Ҡышлаҡ ситендәге тәрән ҡуҙаҡ эсендә сөм-ҡара төҫтәге ғәйәт ҙур таш ята. Әлеге таш тирә-йүндәгеләренә һис оҡшамаған һәм уның бында ҡасан, ниндәй юл менән килеп ятҡанлығын аныҡ ҡына итеп бер кем дә әйтә алмай. Кемдер уны иблес ташы, тип һанай. Имеш, шул сәбәпле ер ташты ҡуйынына ҡабул итмәйенсә, этәреп өҫкә сығарған. Икенселәрҙең әйтеүенсә, ҡара ташты Тәңре үҙе күктән төшөргән. Арыған үткенселәр уның өҫтөнә ултырып ял итһен һәм рухи көс алһын өсөн. Ғайсаға ҡалһа, һуңғыһы хаҡтыр, сөнки ул ошонда килеп, хисле уйҙарға бирелә-бирелә моңайып ултырырға ярата. Килгән һайын рухи көсө арта барғанын тоя. Ысынлап та, йәнһеҙ бер таштан ниндәйҙер йылылыҡ бөркөлә төҫлө. Үҙе лә һиҙмәҫтән, юғары тойғоларға бирелеп киткән Ғайса йырлап та ала:

*Урал да ғына Урал, ай, тиҙәр,*
*Урал буйы ҡыҙырым сауҡа икән...*

**(Дауамы бар).**

**Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Илсур ХӘБИРОВ ошо көндәрҙә үҙенең 50 йәшлек елле юбилейын билдәләй. Актерҙың ике тиҫтәнән ашыу ижади ғүмере ошо театрҙа үткән. Был йылдар эсендә Илсур төрлө характерҙағы алтмыштан ашыу роль башҡарған. Актерҙың ижады, тормош юлы хаҡындағы әңгәмәне башлап ебәрер алдынан мин уға шулай тип өндәштем: "Халыҡ йырсыһы Рамаҙан Йәнбәков хаҡында яҡташтары шаяртып: "Рамаҙан һаман да эшкә урынлашмаған, йырлап ҡына тик йөрөй",- тип әйткән, имеш. Олпат фактуралы актер, типһә, тимер өҙөрлөк, баҫһа, баҡыр иҙерлек баһадир кәүҙәле ир-ат булараҡ, 50 йәшен тулғанда үҙ-үҙеңә: "Минең һымаҡ ир-егеттәр мал артынан ҡыуа, аҡса эшләй, донъя бөтәйтә, үҙенең бизнесын булдырған, ә минең ғүмерем сәхнәлә башҡаларҙың ролен уйнап ҡына үтеп бара түгелме?" тигән һорау биргәнең юҡмы?.."**

# "ҺИН ҮҘЕҢ КӨЛМӘЙҺЕҢ,

## ә һинән барыһы ла көлә", тине әсәйем...

### Иң ҙур баһа

Юҡ, ғүмерем сәхнәлә уйнап ҡына, уйын-көлкө менән генә үтеп баралыр тип һис тә уйламайым. Сөнки мин сәнғәт донъяһына уйнап-шаярып түгел, ә мең төрлө һынауҙар аша үтеп килдем. Йәш саҡта күмәк сәхнәлә йөрөгәндә йә булмаһа башҡарыуы ауыр булып тойолған ролдәр эләккәндә: "Әллә бында килеп яңылыштыммы, ҡайҙа йөрөп ятам?" - тигән һымағыраҡ уйҙар башҡа инеп сыҡҡыланы, әлбиттә. Үҙ ваҡытында театрыбыҙҙа режиссер булып эшләүсе Олег Ханов "Иҙеүкәй менән Мораҙым"да миңә Янбай ролен тәҡдим иткәйне. Янбайҙың Иҙеүкәйҙе үлтергәнен белгәс, күңел ҡайтып йөрөгән саҡтарым да хәтерҙә. Миңә шул саҡ Олег Закир улы ғүмергә етерлек һабаҡ бирҙе. Йәғни,мин актер һөнәрен һайлағанмын икән, үҙемде төрлө-төрлө, булмышыма ҡаршы килгән ролдәрҙә лә һынап ҡарарға тейешмен.

Әгәр ҙә үҙемдең хеҙмәтем менән, уйнап ҡына булһа ла кешегә шатлыҡ-ҡыуаныс алып киләм икән, тимәк, мин үҙемдең һөнәремде дөрөҫ һайлағанмын, тигәнгә инаныһ йәшәйем. Миңә был хаҡта бер спектаклдән һуң Ғәбделәхәт атлы дин әһеле әйтте. Бөгөн килеп мин ошо юлда йөрөйөм икән, бында атайым Сәғит менән әсәйем Ғәфифәнең дә хеҙмәте ҙур. Атайым миңә өс йәш булғанда ғына үлеп ҡалған. Ул Бөйөк Ватан һуғышында разведчик булып йөрөгән, күрһәткән батырлығы өсөн орден менән наградланып ҡайтып, ауылыбыҙҙа тәүге тракторсы-комбайнсы булып эшләгән. Үкенескә күрә, атайымды иҫләмәйем. Беҙ әсәй ҡулында ете бала үҫтек. Әсәйем беҙҙең театрҙа "Ҡыҙ урлау" спектаклен килеп ҡараны. Спектакль бөткәс, ул миңә: "Улым, мин һине шул тиклем итеп уйнай алаһың, тип уйламағайным. Шул тиклем кеше алдында нисек оялмайһың ул?" - тигән булды. "Әсәй, мин нимә оялырға тейеш һуң?" тиһәм, ул: "Һин бер һүҙ әйтһәң, барыһы ла көлә бит, ә һин үҙең көлмәйһең дә, шуға үҙеңдән көләләрҙер тип йәлләп ултырҙым", - тигән була. Әсәйем театрҙың, ундағы комедия жанрының үҙенсәлеген аңламаһа ла, минең уйнауға ана шулай итеп "ауылса" баһа бирҙе. Минең өсөн иң ҙур баһа булды был.

### Ике юл саты

Кешегә һәр ваҡыт ниндәйҙер һынау тоторға, ике юл сатында торорға тура килә. Был юлдан китергәме, икенсеһенәнме, унға китһәм, уңырмынмы, әллә туңырмынмы, һулға китһәм, нисек булыр, тигән икеләнеүҙәрҙән кеше азат була алмай. Үҙ тормошонда яңылышмаҫ өсөн дә кәрәктер ике юл саты. Барыр юлың берәү генә булып, уныһы ла яңылыш юл булһа, донъяла шунан да ҙурыраҡ хата юҡтыр. Минең ғүмеремдә лә ундай мәлдәр булғылаңы, әммә уларҙың иң мөһиме, тормош юлымды билдәләгәне Өфө сәнғәт училищеһының вокаль бүлеген тамамлап, сәнғәт институтына ингәндән һуң булды.

Эш шунда: мин институттың ике - театр һәм вокаль факультеттарына бер юлы һынау тоттом һәм икеһенә лә уҡырға индем. Бер юлы ике ҡуян ҡойроғон тоторға тырышып, ике факультетта ла уҡып йөрөгәндә институт ректоры Заһир Исмәғилев үҙенең бүлмәһенә саҡырып алып: "Былай булмай, икенең берен һайла: йә вокал, йә театр",- тине. Миңә театрҙы һайларға тура килде. Сәнғәт училищеһында уҡығанда студент танытмаһы менән театр спектаклдәренә бушлай инеү мөмкинлеге булғанға күрә, мин сәхнәлә Илшат Йомағолов, Хәй Фәхриев, Хөсәйен Ҡудашев, Әхтәм Абушахманов кеүек сәхнә маһирҙарына һоҡланып, театрға ғашиҡ булып өлгөргәйнем. Театрҙы һайлауыма вокаль бүлектә уҡытҡан Баныу апай Вәлиеваның әйткән һүҙҙәре лә булышлыҡ итте. Уның: "Тауышы бар, әле уға ит ҡунасаҡ, мин был егеттең киләсәген операла күрәм", - тигән һүҙҙәре мине һиҫкәндереп ебәрҙе. Ауыл тәбиғәтендә тәрбиәләнгән лирик йырҙар башҡарыусы кеше булараҡ, опера минең булмышыма ят булып тойолдо. Нисектер, үҙемде опера сәхнәһендә ҡыҫҡырып йырлаусы кеше итеп күҙ алдына килтерә алманым. Икенсенән, мин театрҙы һайлап, бер юлы ике ҡуянды ла ата алдым кеүек. Ни өсөн тигәндә, спектаклдә лә сәхнәлә йырлау мөмкинлеге бар бит әле. Был йәһәттән, йырсы актерҙар икеләтә бәхетле.

### Тәрбиәләүсе роль

Мостай Кәримдең "Йәйәүле Мәхмүт"ендә мин Инсаф ролен уйнаным. Бик ауыр спектакль булды, репетициялар дүрт ай буйына барҙы. Инсаф ғүмере буйына бухгалтер булып эшләгән, ғүмере буйына отчетты арттырып яҙып, премиялар алған, ғүмере буйына арт яғына типһәләр ҙә: "Ғәфү итегеҙ, мин яңылыш ҡына һеҙгә ҡағылдым шикелле", - тип тибеүсенән түбәнселек менән үҙе ғәфү үтенгән. Спектакль аҙағында Инсаф төрлө кисерештәр аша: "Мин бит ир кеше, мин үҙемде-үҙем хөкөм итергә тейешмен. Мин ни өсөн оят еремде изге китап менән ҡаплап йөрөргә тейеш?" - тигән һүҙҙәр әйтеп, икенсе кешегә әүерелә. Быға тиклем һәр ваҡыт ҡатынының әйткән һүҙенән сыға алмаған ир тәүге тапҡыр ҡатынына "Молчать! Етте..." тип ҡысҡырып әйтә ала.

Мин үҙем тәбиғәтем менән боласы түгелмен, йыуаш уҡ булмаһам да, сығынсы түгелмен, асыуымды буйыма һеңдерә беләм. Иң тәүҙә кеше күңелен уйлап эш итәм. Шулай ҙа ошо ролде башҡарғандан һуң үҙемдә лә ҙур үҙгәрештәр барлыҡҡа килгәнен тойҙом. Элек күп нәмәгә "эйе-эйе" тип ризалыҡ биргән холҡомда Инсафтыҡы ише ҡырҡыу үҙгәрештәр, протест барлыҡҡа килде. Үҙемә-үҙем шундай һорау бирҙем: "Инсаф ғүмере буйы бар



нәмәгә риза булып йәшәгән, әммә ул тәүге тапҡыр "юҡ" тип әйтергә үҙендә көс тапҡан бит. Нимә, һин дә шундай көстө таба алмайһыңмы ни?.." Ҡыҫҡаһы, Инсаф роле мине үҙ-үҙемә бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарарға мәжбүр итте, үҙемде яҡларға өйрәтте.

Ғөмүмән, һәр бер ролдең актерҙа ниндәйҙер эҙе тороп ҡала. Спектакль тамамланып, костюмыңды сискәс, ролеңде, уға бәйле барлыҡ эмоцияларыңды һин театрҙа ҡалдырып китергә тейешһең. Әммә был мөмкин түгел, ролең үҙең менән бергә йөртоңа әйәреп ҡайта, йоҡо бирмәй, уйландыра, геройыңдың проблемалары менән оҙаҡ ваҡыт борсолоп йә шатланып йәшәргә мәжбүр итә. Тамашасыларҙа бары тик ошондай тәьҫир ҡуҙғатҡан осраҡта ғына һинең ролең үҙ маҡсатына өлгәште тигән һүҙ. Минеңсә, театрҙың да төп маҡсаты кешене яҡшы яҡҡа үҙгәртеүгә йүнәлтелгән бит.

### Күңел ятмаған роль

Олег Закир улы Ханов өйрәткәнсә, актер булып эшләгәс, күңеленә ятмаған, булмышыңа тура килмәгән ролдәрҙе лә башҡарырға тура килә. Театр асылғас та, 1992 йылда, режиссер Ришат Саяповтың балалар өсөн яҙылған һәм ҡуйылған "Көсләләрҙән көслә" тигән спектаклендә Ташбаш ролен уйнаным. Персонаждың исеменән үк күренеүенсә, роль миңә шундуҡ оҡшаманы. Әммә директорҙың бойороғо бар, ролдәр бүленгән, репетициялар башланды, ҡыҫҡаһы, оҡшамаһа ла, уйнарға кәрәк.

Күңелең тартмаған ролде башҡарыу бик ныҡ тоҙло ашты ашауҙан да ҡыйыныраҡ. Шул уҡ ваҡытта ике-өс көн буйы ауыҙыңа тәғәм ризыҡ ҡапмағанһың, ашамағаһың, аслыҡтан хәлең бөтөп ҡоларға мөмкинһең. Шуға күрә лә сирылып тигәндәй эшкә барҙым, сәхнәлә робот кеүек йөрөп ролде башҡарҙым. Спектакль бөткәс, баш әйергә барғанда балалар алдында уңайһыҙланғанымды күрһәгеҙ. Тиҙ генә башты эйҙем дә, сыҡтым да киттем. Ҡыҫҡаһы, күңел ятмаған ролде башҡарыу яратмаған кешеңде яратҡан булып ҡылаһыуға тиң, ул мөхәббәттең үҙе түгел, битлеге һымаҡ.

### Төрлө хәлдәр була

Әлмир Әлмөхәмәтовтың "Алыҫ та, яҡын да түгел" тигән спектаклендә миңә НКВД майоры ролен башҡарырға тура килде. Бер ай репетиция яһағандан һуң дуҫ егеттәр янына барҙым. Табында һәүетемсә генә һөйләшеп, сәй эсеп ултырһаҡ, бер егет миңә: "Илсур ағай, һин бөгөн бигерәк ҡурҡыныс та ул", - тип әйтеп һалмаһынмы. "Ни өсөн ҡурҡынысмын?"- тип һорағас, ул: "Белмәйем, бына һинең ҡарашыңды күргәс, йөрәгем урынында түгел", - тип аптыратты. Уның шойҡаны башҡаларға ла күсте һәм башҡа егеттәр ҙә миңә шикләнеп ҡараған һымаҡ тойола башланы. Улар ҙа егеттең һүҙен хупланы. Ахырыһы, НКВД-сы роленә шул тиклем инеп киткәнменде инде. Егеттәрҙе ниндәй спектакль ҡуйырға әҙерләнеп йөрөүебеҙҙе аңлатып, тынысландырырға тура килде.

Ҡайһы ваҡыт спектакль барышында башҡарған ролеңдең кисерештәре үҙеңдең шәхси тормошоңдағы кисерештәр менән дә тап килә һәм был хәл көтмәгәндә спектаклде икенсе йүнәлешкә бороп ебәреүе лә ихтимал. Шул уҡ "Алыҫ та, яҡын да түгел" спектаклендә НКВД майоры бер әсәне ҡулға ала. Әсә кеше төрмәгә китер алдынан күк төҫтәге свитерын балаларына ҡалдырып китә. Ул мәл әсәйем мәрхүмә булғайны инде. Уның да шундай төҫтәге кейеме иҫкә төштө лә, күҙҙәремә йәштәр килеп тығылды. Үҙемде тыйып булмай. Ярай, спектаклдең аҙағы ине. Спектакль тамамланып, баш әйергә барғанда мин иңкылдап, эстән генә илай инем инде. Ундай хәлдәр театр тормошонда күп була.

Әгәр ҙә сәхнәлә етди драмаға йә трагедияға нигеҙләнгән спектакль барһа, актер бер ваҡытта ла үҙенең шәхси тойғоларын тышҡа сығарырға тейеш түгел. Ә бына комедияға килгәндә, был хәл мөмкин. Был осраҡта "шәхси тормош мотивы", кирәһенсә, комедияны тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ итеүе, байытыуы бар. Комедияла актерҙың ҡайғырыуы ла, шатланыуы ла юмор булып ҡабул ителә бит инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илсур менән әңгәмәләшкәндә күренекле шағир Рәйес Түләктең "Был тормошом минең сәхнәләрҙән йырлай алмай сыҡҡан йыр һымаҡ..." тигән тәрән мәғәнәле шиғри һүҙҙәре иҫкә төштө. Шағир күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән сағында яҙғандыр, күрәһең, был һүҙҙәрен. Сөнки беҙ беләбеҙ, шағир Рәйес Түләк үҙ тормош сәхнәһендә үҙ йырын йырлап, үҙ һүҙен әйтеп китте. Әйтә торғандары тағы ла күберәк ине... Билдәле актер һәм йырсы Илсур Хәбиров иһә, сәхнәлә лә, тормошта ла йырлап йәшәй. Шуның менән бәхетле лә ул.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**яҙып алды.**

✓ *Зөлхизә айының 10-сы көнөндә, байрам намаҙынан алып, өс көн дауамында, айҙың ун өсөнсө көнө башланғансы ҡорбан салырға була. Был сиктәрҙе теүәл үтәү мөһим.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠӘҺҮӘ ЭСЕҮ...

## гүзәл затты аҡыллыраҡ итә

■ Бостондың Бригама госпитале (АҠШ) тикшеренеүселәре ир-егеттәргә поливитаминдар ҡабул итергә кәңәш бирә. Улар әйтеүенсә, әгәр ҙә оло йәштәге ир-ат даими рәүештә мультивитаминдар эсһә, яман шеш хәүефе күпкә кәмей. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Майкл Гациано аңлатыуынса, әлегә тиклем поливитаминдар ҡабул итеүҙең файҙаһы тикшерелмәгән булған. Шуға ла ғалимдар ун йыл дауамында 50 йәштәр самаһындағы 15 мең ир-егетте тикшергән. Уларҙың бер өлөшө ун йыл буйына поливитаминдар эскән, ҡалған яртыһы плацебо ҡабул иткән. Һөҙөмтәлә, беренсе төркөмдә икенсеһенә ҡарағанда онкологик сирҙәр һирәгерәк осраған. Әммә әлегә был тенденция 50-не үткән ирҙәргә генә ҡағыламы, юҡмы икәне асыҡланмаған, шуға ла тикшеренеүҙәр һаман дауам итә.

■ Варвик медицина мәктәбе (Бөйөк Британия) үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, йәшелсә-емештәр үҙенә бәхетле тойоу өсөн дә кәрәк. 80 мең британлының рационын анализлап, ғалимдар шундай фекергә килгән: йәшелсә һәм емеш-еләк яратыусылар тормоштан да ҡәнәғәт була, үҙен бәхетлерәк тә тоя, шуға уларҙың психик сәләмәтлеге лә яҡшыраҡ. Кеше ни тиклем күберәк йәшелсә-емеш ҡуллана, ул үҙен шул тиклем яҡшыраҡ тойған. Әммә был факты йәшелсә һәм емештәрҙе күберәк ашау тормоштон сифатын яҡшырта, тип аңларға кәрәкмәй, тип иҫкәртә ғалимдар. Бары тик бәхетлерәк кешеләр былай ҙа файҙалы ризыҡтарҙы йышыраҡ ҡуллана.

■ Стресс ваҡытында ҡәһүә эсеү ҡатын-ҡыҙҙарға яҡшы тәьҫир итә. Ә бына ир-егеттәр бындай осраҡта үҙенең мейе әүҙемлеге тиҙлеген әкренәйтә генә, тип раҫлай Бөйөк Британия белгестәре. Independent News аныҡлауынса, был тикшеренеүҙәр барышында асыҡланған. Унда ҡатнашыусыларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһе ябай, икенсеһенә кофеины булмаған ҡәһүә эсергә тәҡдим иткәндәр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ябай ҡәһүә эсеүсе гүзәл заттарҙың мейе әүҙемлеге кофеинһыҙ ҡәһүә эсеүсе ханымдарҙыҡына ҡарағанда күпкә яҡшырған. Ә ир-егеттәр, киреһенсә, мәсьәләләрҙе ауырыраҡ һәм яйыраҡ сискән, мәғлүмәтте лә хәтерендә насарыраҡ ҡалдырған.

■ Американың Маунт-Синай медицина мәктәбе тикшеренеүселәре раҫлауынса, С витамины остеопороздан яҡшы һаҡлай. Glob-news яҙыуынса, тикшеренеүҙәр ҡомаҡтарҙа үткәрелгән. Ике ай дауамында С витамины менән байытылған рационлы ҡомаҡтарҙың һөйәктәренең тығыҙлығы элеккесә һаҡланған. Был витаминһыҙ ҡалған йәнлектәр төркөмө түбән һөйәк тығыҙлығына дусар булған. Белгестәр тәүге төркөмдөң һөҙөмтәһе С витаминына бәйле булыуын белдерә.

■ Маҡсатҡа ынтылып йәшәү - кеше характерының иңғай сифаты ғына түгел. Тормошта маҡсат булыуы кешенең физик сәләмәтлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Чикаго психологтары һәм физиологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк осрай. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ҠОРБАН ҒӘМӘЛЕ -

## Аллаһы Тәғәлә алдындағы фиҙаҡәрлек



**Ҡорбан байрамы көндәрендә үҙ-үҙен аямай изге эштәр атҡарған, туғандарына, мохтаждарға, белем юлында булыусыларға ярҙам ҡулы һуҙырға тырышҡан кешеләр, хажға барыусылар кеүек үк, ҙур әжер аласаҡ.**

Ҡорбанға килтерелгән малдың тәүге ҡаны менән изге ғәмәлде үтәүсе мосолмандың күп гонаһтары ярлыҡана. Был изге ғәмәл Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт һәм Уға яҡынлашыу юлдарының береһе. Кешеләрҙең иң насарҙары, мөмкинлектәре була тороп та, ҡорбан килтермәгән һарандар, тип әйтелә хәҙистәрҙең береһендә. Мөхәммәт бәйғәмбәр Ҡорбан ваҡытында ике малды һуғымға килтерер булған. Береһен - үҙе, икенсеһен өммәте өсөн. Аллаһы Тәғәлә рәхмәтенә өлгәшергә теләгән хәлле мосолмандар ҙа шулай уҡ ике ҡорбан килтерә, береһе - үҙҙәре өсөн, икенсеһе - Бәйғәмбәр хаҡына.

Ҡорбан һүҙенең мәғәнәһе - "яҡынлашыу". Ул Аллаһы Тәғәләгә яҡынлашыу сараһы. Раббыңа үҙеңде, мөлкәтеңде, ғүмереңде фиҙа килтереү менән иҫбатлана. Уның нигеҙендә Аллаһы Тәғәләнең ихтыярына буйһоноу һәм ошоно тормошҡа ашырыу ята. Раббыһы әмеренә күңгәне өсөн генә мосолман изге ғәмәлде үтәй. Изге Ҡөрьәндә: "Аллаға уларҙың (ҡорбанға килтерелгән малдың) ите лә, ҡаны ла һис барып етмәҫ, әммә уларға һеҙҙең тәҡүәлек барып етер", - тиелә.

Ғибәҙәттең тарихы Ибраһим бәйғәмбәргә ҡайтып ҡала. Уға улы Исмәғилде ҡорбанға килтерергә бойороҡ килә. Был Ибраһимдың итәғәтлегенә, иманына һынау була. Ул Аллаһы Тәғәлә әмеренә буйһона. Бәйғәмбәр Раббыһына тоғрологон иҫбатларға әҙер икәнен күрһәткәс, ҡорбан йәннәттән төшөрөлгән тәкәгә алыштырыла.

Күп аяттарҙа, хәҙистәрҙә ҡорбан тураһында әйтелә. Уның мөһимлегенә Ислам ғалимдары айырым баҫым яһай. Үҙен мосолман тип һанаған һәм мөмкинлеге булған кешенең изге ғәмәлдән ситтә тороп ҡалырға хоҡуғы юҡ, тиҙәр. Ҡорбанға бишҙән ерлектә ике йәше тулған һыйыр малын, йәше тулған һарыҡ, кәзәне килтерергә була. Һыйыр малын ете кеше, һарыҡ-кәзәне бер кеше ҡорбанға килтерә. Мал көр, сәләмәт булырға тейеш. Бер күҙгә йәки ике күҙгә лә һуҡыр булған, мөгөҙҙәренең береһе йәки икеһе лә төбөнә тиклем һынған, ҡолағы йәки ҡойроғонон яртыһынан күберәге өҙөлгән, йәки мал аяғына баҫа алмаһа, ауырыу, үтә ябыҡ, хәлһеҙ булһа, тештәре булмаһа, имсәктәре боҙолһа, уны ҡорбанға килтерергә ярамай.

Малдың ите өс өлөшкә бүленә. Беренсе өлөш мохтаждарға таратыла. Шулай уҡ белем алған йәштәргә, дин юлында йөрөгән кешеләргә биреү хуплана. Шулай уҡ ҡорбан таратыу менән шөғөлләнгән махсус хәйриә ойошмаларына тапшырырға мөмкин. Икенсе өлөш туғандарға һәм яҡындарға таратыла. Өсөнсө өлөш ғаиләлә ҡалдырыла.

Зөлхизә айының 10-сы көнөндә, байрам намаҙынан алып, өс көн дауамында, айҙың ун өсөнсө көнө башланғансы ҡорбан салырға була. Был сиктәрҙе теүәл үтәү мөһим. Сөнки байрам намаҙынан алда һәм байрамдың өсөнсө көнөндә ҡояш байығандан һуң килтерелгән мал ҡорбан итеп ҡабул ителмәй, ябай һуғым булып ҡала.

Изге ғәмәлде тормошҡа ашырыуҙың бар нескәлектәрен дини китаптарҙан, календарҙарҙан табырға мөмкин.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ТЫЙЫЛЫРҒА ТЕЙЕШЛЕНЕҢ...

## иң-иң хәтәре ошоноһо

**"Эй, иман килтергән әҙәмдәр, үҙегеҙгә бирелгән ризыҡтарҙың саф-таҙа, хәләл булғандарын ғына ашағыҙ. Аллаһ һеҙгә бары тик үләкһә, ҡан, суҫҡа ите ашауҙы һәм Аллаһтан башҡа затҡа бағышлап һуйылған итте харам ҡылды. Ләкин мәжбүр хәлдә ҡалһа, саманан тыш булмағанда, әҙ миҡдарҙа ашаһа, гонаһ булмаҫ. Шик юҡ, Аллаһ ярлыҡаусы һәм рәхимлелер". /"Һыйыр" сүрәһе, 2:173/.**

Суҫҡа итен ризыҡ урынына ҡулланыу кеше сәләмәтлеге өсөн бик ҡурҡыныс һәм зарарлы. Бының шулай икәнен кешеләр элек-электән белә, әммә уны ҡулланыуҙы дауам итә.

Суҫҡа ниндәй генә гигиеник шарттарҙа аҫыралмаһын һәм таҙа аҙыҡ менән туҡланмаһын, ул барыбер үҙ бүлендектәре (һейҙек, тиҙәк )менән туҡланған хайуан булып ҡала. Ошондай физиологик үҙенсәлеге арҡаһында уның организмы башҡа бөтә хайуандар менән сағыштырғанда күберәк антиесемдәр етештерә. Бөтә был антиесемдәр һәм үҫеү гормондары матдәләр алмашынған ваҡытта тәбиғи рәүештә суҫҡаның мускулдар тұҡымаһына барып әләгә.

Суҫҡа итендә холестерин һәм липидтар кимәле лә бик юғары. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә шул асыҡланды: тап ошолар, йәғни антиесмдәр, үҫеү гормондары, холестерин һәм липидтар кимәленең юғары булыуы арҡаһында суҫҡа ите кеше сәләмәтлегенә ысын ҡурҡыныс менән янай.

Статистика мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, суҫҡа итен АҠШ-та һәм Германияла иң күп ҡулланыусылар йәшәй, тап шуға ла был илдәрҙә йәшәүсе халыҡтың яртыһынан күбеһе һимеҙлектән яфалана.

Суҫҡа итенән торған туҡланыу рационы кеше организмын үҫеш гормоны һөжүменә дусар итә. Шул арҡала артыҡ килограмдар йыйыла, аҙаҡ уларҙан теләһә ниндәй диета менән дә ҡотолоп булмай, улар май ҡатламы булып ятып, буй-һынды үҙгәртеүгә алып килә.

Былардан тыш, суҫҡа ите йыш ҡына кеше организмына зарарлы паразиттар, мәҫәлән, сусҡаның мускулдар туҡымаһында тупланған түңәрәк ҡорттар - трихиндар йоҡтора. Кеше организмына барып әләккәс, был трихиндар йөрәк мускулдарына урынлашып, шунда үрсей башлай һәм кешегә үлем ҡурҡынысы тыуҙыра.

Бөтә был сәбәптәрҙең барыһы ла беҙгә Хоҙайҙың суҫҡа итен ашауҙы тыйыуының мәғәнәһен аҫып һала. Бынан тыш, Аллаһының тыйыуы - ул кешеләрҙе суҫҡа итенең зарарлы йоғонтоһонан һаҡлау ул. Хатта иң стерилле шарттарҙа үҫтерелһә, әллә ниндәй эшкәртеүҙәргә дусар ителһә лә суҫҡа итенең был үлемесле зыянынан ҡотолоу мөмкин түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Теге быуаттың 20-се йылдарына тиклем кешеләр суҫҡа итенең кеше организмына туранан-тура зыян итеүен белмәгән. Шаҡҡатырғыс факт: 14 быуат элек, кешелек әле биология, микробтар, бактериялар, трихиндар, гормон һәм антиесемдәр тураһында белмәгәндә, Ҡөрьәндә суҫҡа итенең зыяны һәм уны ҡулланыуҙы тыйыу тураһында туранан-тура иҫкәртеү яҙылған була. Әйткәндәй, хәҙер медицина ла суҫҡа итенең зыянлы булыуын һәм кеше организмы ихтыяжына физиологик яҡтан тап килмәүен раҫлай.**

**Харун ЯХЪЯ.**
**"Ҡөрьән мөғжизәһе" китабынан.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ПРИВИВКА ЭШЛӘТ ЙӘ...

## битлек кейеп ал



**Гриптың вирустары туҡтауһыҙ үҙгәреп тороусан. Был сезонда уның "Калифорния","Виктория","Висконсин" тип аталған штаммдары көтөлә. Улар быға тиклем булмағанса ҡатмарланыуҙар менән янамай, әлбиттә, ләкин шуныһы борсолдора: Башҡортостанда йәшәүселәрҙең был төрҙәргә иммунитеты юҡ, тимәк, сир йоҡтороу хәүефе бик ҙур.**

Республикала әлегә грипп менән сирләүселәр юҡ. Табиптар бөгөндән үк прививкалар эшләй башларға кәңәш итә. Белгестәр вакциналау ваҡытында организмға индереләсәк тере вирус тураһындағы ҡурҡыныс уйҙырмаларҙы кире ҡаға. "Вакцинала тере штаммдар түгел, ә иммунитет булдырыусы антигендар ғына бар,- ти БР Гигиена һәм эпидемиология үҙәге белгесе Леонид Коробов. - Прививканан һуң ҡайны берәүҙәрҙең сырхап алыуы организмдың вакцинаға ҡарата ҡәҙимге реакцияһы ул". - Шуны ла иҫтә тотоғоҙ: һәр төрлө сире көсәйгән осорҙа ауырыуҙарға һәм препаратҡа аллергияһы булғандарға прививка эшләтеү тыйыла. Иммунитеттары көсһөҙ булыу сәбәпле, хәүеф төркөмөндәге кешеләргә һәм хроник сирлеләргә , шулай уҡ медицина хеҙмәткәрҙәренә, педагогтарға, студенттарға, балаларға, 60 йәштән өлкәндәргә прививка бушлай эшләнә, ә ҡалғандарға уны һатып алып эшләтергә тура киләсәк,- ти Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса эпидемиологик күҙәтеү бүлеге начальнигы Зөһрә Даянова. Гәжәпкә күрә, баш ҡаланың күпселек аптекаларында тейешле вакциналар булмай сыҡты: һорау юҡ, тип аңлаталар был хәлде. Дөрөҫ, "Фармленд"та Нидерландынан килтерелгән 271 һумлыҡ "Инфлювак" булыуы асыҡланды. "Башфармация" аптекаларындағы "Гриппол плюс" вакцинаһының ҡаҙы 199 һум.

- Вакциналау кампанияһының "өҙләгеү" ҡурҡынысы юҡ,- ти СПИД һәм йоғошло ауырыуҙарға ҡаршы көрәш һәм уларҙы иҫкәртеү буйынса үҙәктең баш табип урынбаҫары Г.Ғәбитова.- Балаларға прививка эшләү әүҙем бара, ә өлкәндәр өсөн Мәскәүҙән препараттар килеүен көтәбеҙ.

- Интернеттан теләһә ниндәй хәбәрҙәр уҡыйҙар ҙа прививканан ҡурҡалар,- ти Өфөнөң 2-се балалар поликлиникаһы баш табибы Э. Бикмәтова.- Беҙ балаларҙы мотлаҡ вакциналау кәрәк, тигән фекерҙәбеҙ, юғиһә, вирус бик нығ таралаһаҡ.

Башҡорт дәүләт медицина университетының йоғошло балалар ауырыуҙары кафедраһы мөдире Валерий Егоров әйтеүенсә, вакциналау мотлаҡ үткәрелергә тейеш. "Һәр хәлдә, мин үҙем дә, ғаиләм дә йыл да прививка эшләтәбеҙ,- ти ул.- Ә инде ниндәйҙер сәбәптәр буйынса уны эшләтеүҙән баш тартыусыларға мин интерферон төркөмө препараттарын ҡулланырға тәҡдим итәм. Халыҡ дауалау сараларынан был осраҡта әллә ни һөҙөмтә көтөү файҙаһыҙ, тиер инем. Һарымһаҡ ашап ҡына вирустан ҡотолоп булмаясаҡ. Ә бына битлек кейеп йөрөү күпкә ышаныслыраҡ".

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләнә.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК КАРТЛАС

## Аҫҡа алып барыусы баҫҡыс буйлап - өҫкә

Яҡынса 19 йәшкә тиклем ярым иҫһеҙ торошта йәшәгән кеүекмен. Йәмғиәт аңымда нисек формалашһа, йәғни өлкәндәр мотлаҡ ҡунаҡҡа йөрөй, унда күңел аса, спиртлы эсемлектәр эсә - шулай булырға тейеш тип ҡабул итә инем. Мәктәптә лә, ғаиләлә лә, педагогия училищеһында ла минә тормош юлын икенсе төрлө үтергә мөмкин икәнлеген берәү ҙә бер тапҡыр ҙа әйтмәне. Ололар араһында мин шарап йәки араҡы эсмәгән бер генә кешене лә күрмәнем. Әйткәндәй, дөйөм ҡағиҙәнән бары тик бер генә ташлама булды: Баймаҡ районының Байым ауылынан атайым яғынан туған Ғәбделрәсүл бабайым ғүмере буйы айыҡ тормош алып барҙы.

15 йәшемдә Сибай педагогия училищеһына уҡырға индем һәм ғаиләнән айырылдым. Шул ваҡыттан уҙ аҡсама үҙем хужа булдым. Тәү тапҡыр спиртлы эсемлек эскәнемде энәһенән-ебенәсә иҫләйем. Был көн 1965 йылдың 23 феврале ине. Беренсе курста уҡыйым һәм фатирҙа йәшәйем. Байрам көнөндә ятаҡҡа дуҫтарыма килдем. Икенсе курс студенттары беҙгә, йәштәргә, календарҙың ҡыҙыл датаһын билдәләргә тәҡдим итте. Беҙ ризалаштыҡ. Шарапҡа һәм ҡабымлыҡ алырға бер һум илле тиндән йыйылдыҡ. Магазинға барыуҙы, табын әҙерләүҙе һәм сәй ҡайнатыуҙы икенсе курс студенттары үҙ өҫтөнә алды. "Славянка" болгар шарабын эстек. Бер шешәне дүрт ҡырлы стаканға бүлдек. Бер кешегә тулы стакандан саҡ ҡына кәмерәк өлөш сыҡты. Сәкәштерҙек. Мин әҙ генә тәмләп ҡараным да, стаканды кире өҫтәлгә ҡуйҙым. Һарғылт шыйыҡсаның тәме бер ҙә оҡшаманы. Эргәмдә ултырған икенсе курс студенты быны шәйләп: "Ә һин еҫкәмә һәм тәмләмә, - тине. - Бары тик шарапты тамағыңа ҡой һәм һуңынан ҡабымлыҡ ҡабып ҡуй!" Шулай тип ул, дәртләндергәндәй, инбашымдан ҡағып ҡуйҙы. Үҙе башын артҡа ташлап, ысынлап та, стакандағы шыйыҡсаны тамағына ҡойҙо. Мин башта хәүефләнеп ҡарап торҙом да, уның өлгөһөнә эйәрҙем. Әлбиттә, шунда уҡ стаканды төбөнәсә бушата алманым, шулай ҙа яртыһынан күберәген эстем. Ыһылданым, тоҙло ҡыяр ҡабып ҡуйҙым. Эсемдә һыуыҡ һәм насар нәмә барлығын тойҙом. Әйтерһең дә, унда тәлмәрйен ултыра. Уны ҡоҫҡом һәм эстәге насар ауырлыҡтан ҡотолғом килде. Әммә түҙҙем, сөнки яңы таныштарым эргәһендә көсһөҙ булып күренгем килмәне.

Ун минуттан һуң барлыҡ был күңелһеҙлектәр онотолдо. Кәйеф күтәрелде: бер сәбәпһеҙ көлә башланым. Башым ҙурайҙы һәм ауырлығын юғалтты. Муйыным, уны күтәреп тора алмаҫ, бер яҡҡа ҡыйшайҙы. Мин быға тиклем бер ваҡытта ла кисермәгән тойғолар кисерҙем. Купмелер ваҡыттан һуң күмәкләшеп бейеү ойоштороған коридорға сыҡтыҡ. Уның йәштәр йыйылған дүртмөйөш формаһындағы өлөшө минә әкиәт һарайындай тойолдо. Бөтөн ерҙә уттар балҡый, ә ҡыҙҙарҙың күҙҙәре йондоҙҙарҙай яна. Улар майҙандың парҙар әйләнгән яғында ике-өс рәт булып теҙелгән. Йәш егет, башын баянына һалып, "Маньчжурия түбәһендә" вальсын уйнай. Беҙ килгәс, баштар беҙҙең яҡҡа боролдо, сөнки тамашасылар араһында егеттәр юҡ ине. Ул ваҡытта мин үҙемдең тышҡы ҡиәфәтемә иғтибар ҙа итмәй торғайным. Тирем аҡ һәм шыма, ә бит остарым һәр саҡ ҡыҙарып тора. Күҙҙәрем шаян һәм хәйләкәр йылмая. Шуға күрә педагогия училищеһы ҡыҙҙары минә һәм башҡа егеттәргә иғтибарһыҙ ҡала алмай ине.

Артабан ни булғанын иҫләмәйем. Әммә шул көндө мин аҫҡа табан алып барыусы баҫҡысҡа беренсе аҙым яһаным. Эсеү оҡшап ҡалды. Өс йылдан һуң үҙем йәштәргә шарап эсеү һөнәренә өйрәтә башланым. Ул ваҡытта минә 18 йәш ине. Яңы ғәҙәтем минә бик ҡимматкә төштө. Йөҙөмдә урыны-урыны менән һытҡылар баҫты. Әммә мин көймәйем, сөнки тап ошо үҙгәрештәр минә ғүмеремдә һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итте. Әгәр физиономиям тәүге матурлығын юғалтмаһа, мин, моғайын, эскесегә әйләнеп, күптән үлгән булыр, ҡеберем өҫтөндә әрем йәки ҡарағура үҫкән булыр ине. Әгәр кешене эскелек үҙ ҡосағына ала икән, ғүмер менән хушлашыуҙың башҡа ышанаслы һәм тиҙ юлы юҡ.

Теге байрам көнөндә эсеүселәрҙең яртыһынан күберәге хәҙер был донъяла юҡ инде. Ҡайны берҙәре, эскелеккә бирелеп, уҡытыусы булып эшләй алманы. Сәләмәтлектәрен юғалтып, шиңеп, Урал арьяғы райондары ауылдарында йөрөйҙәр. Улар хәҙер йәшәмәй, ә үҙ быуатын үткәрә. Мин бәхетле: тере ҡалдым һәм ошо ҡурҡыныс соҡорҙан сығырға үҙемдә көс таптым.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ, философия фәндәре докторы. (Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Юғалған үҙидара

Тышҡы донъяла мөгжизәләр тыуҙырыр алдынан һеҙ үҙегеҙҙең эске донъяғыҙҙа тыуҙыра алған ғәмәлдәрҙең стандартын күтәрергә тейешһегеҙ. Шәхес менән һөҙөмтәле идара итеүҙең асылы - аң менән һөҙөмтәле идара итеү ул. Ә быныӊ өсөн рухи тәртипкә буйһонорға кәрәк. Йәғни һәр уйығыҙ изге һәм файҙалы булырға тейеш.

Хыялығыҙҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлеш алған һәр идея, бәләкәй генә алтын кисәгенә бәрәбәр һәм ул һеҙҙе байлыҡҡа табан алып бара. Һәр нәмә ике тапҡыр барлыҡҡа килә: беренсеһендә мейегеҙҙә эскиз формаһында, икенсеһендә инде ысынбарлыҡта. Был эшмәкәрлек архитекторҙың эшенә оҡшаш: ул да бит яңы йорттоң нисек булырын тәүҙә һыҙма, рәсем рәүешендә һүрәткә төшөрә, һуңынан ошо һыҙмалар буйынса ентекләп ҡоролманың үҙен төҙөй.

Үҙ-үҙең менән һөҙөмтәле идара итеүҙең йүнәлеш биреүсе принцибы бик ябай: тәүҙә алдығыҙға маҡсат ҡуйығыҙ. Бөгөн һеҙҙең өсөн мөһим булған ғәмәлдәр ваҡ-төйәк алдында онотолоп, икенсе планға күсергә тейеш түгел. Ерҙә үҙегеҙҙең тәғәйенләнешегеҙҙең асылын ҡағыҙҙа сағылдырғандан һуң, иң мөһиме нимә икәнлеген аныҡ әйтеп бирә алаһығыҙ. Бәлки, табип булырға теләйһегеҙҙер йәки билдәле спортсы? Бәлки, байлыҡ туплап, бөтөн донъяға билдәлелек алырға хыялланаһығыҙҙыр? Әллә һеҙҙең тормош мәғәнәһе формулаһы үҙ эсенә күңел тыныслығын аламы? Нисек кенә булмаһын, һәр хыял тормошҡа ашырлыҡ һәм һеҙ быныӊ шулай булыуына күнекканһегеҙҙер инде. Хәҙер маҡсатығыҙ йүнәлешендә ҡабул ителгән һәр уй, һәр фекер, һәр ғәмәл уға яҡынайта барыуын аңлау зарур. 80/20 ҡағиҙәһен онотманығыҙмы әле? 80 процент һөҙөмтә 20 процент әүҙемлегеҙ эҙемтәһе булып тора. Тормошоғоҙға ниндәй эштәр ысын үҙгәрештәр индереүен асыҡлағыҙ һәм ҡайҙа барырға тейешһегеҙ, тап шунда йүнәлегеҙ. Энергиығыҙҙы ҡуйған маҡсаттарығыҙға өлгәшеүгә йүнәлтегеҙ. Был - тормошта уңыш ҡаҙаныуҙың иң төп серҙәреренең береһе. Нисек кенә яҡшы булмаһын, ҡапма-ҡаршы яҡҡа яһалған аҙым һеҙҙе тормошоғоҙҙа иң мөһим тип билдәләгән маҡсатығыҙҙан алыҫлаштырасаҡ. Шуға күрә үҙегеҙгә бер ваҡытта ла иң мөһим нәмәне әһәмиәте әҙерәк ғәмәлдең ҡорбаны итергә рөхсәт итмәгеҙ.




Һеҙҙең ваҡытығыҙ һәм көндәлек эштәрегеҙ шәхси үҙидаралыҡ өсмөйөшөнөң өс мөйөшө сигендә тора. Күренеүенсә, ғәмәлдәребеҙ C1, C2, C3 сегменттарында йәки өсмөйөштөң "йөрәге"ндә урынлашҡан. C1 сегментындағы ғәмәлдәр һеҙгә бик нығ оҡшай, әммә файҙа килтермәй (мәҫәлән, телевизор ҡарау). C2 сегментында мөһим булып күренгән, ләкин ҡиммәте ҙур булмаған эшмәкәрлек тора (мәҫәлән, һеҙ концерттар менән йөрөүсе пианист булырға хыялланаһығыҙ, әммә йыл буйына компьютер үҙләштерәһегеҙ). C3 сегменты, теләйбеҙме, юҡмы, әммә беҙҙең иғтибарҙы һәм ҡатнашлыҡты талап итеүсе көрсөк хәлдәре. Улар йыш ҡына энергияның күп өлөшөн һура.

**Робин ШАРМА.**



## 29 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Женский журнал"
09.15 "Жить здорово!" (12+)
10.25 "Контрольная закупка"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Убойная сила". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак", 11-я серия (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Мосгаз", 1-я серия (16+)
23.15 "Вечерний Ургант" (16+)
23.50 Ночные новости
00.10 "Без свидетелей". Сериал (16+)
00.40 "Пропавший без вести" (16+)
01.30, 03.05 "Конан-Варвар" (12+)
03.00 Новости
04.00 "Следствие по телу" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Все будет хорошо!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Анжелика", 9-я и 10-я, закл. серии. Мелодраматический сериал (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Дело следователя Никитина", 1-я и 2-я серии (12+)
